*"Һәр кем, аҡыл эйәһе йәки наҙан булһынмы, изгелекте нәфрәттән айыра ала. Ләкин нәфрәт эсенә йәшерелгән изгелекте, йәки изгелек эсендәге нәфрәтте йөрәгендә рухи үҙәк булған кеше генә күрәсәк".*

*РУМИ.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 - 16 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№32 (554)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡайһы ерең ауыртһа...**

йәнең шул ерҙә



3

**Юғары белемле бул...**

энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙып булһа ла



4

**Киләсәк өсөн...**



8-9 һул ҡул яуаплы!

**"Һәр нәмәнең үҙ ваҡыты..."**



13

14 ТВ-программа

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Был көндәрҙә мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәләре үҙ эшен башланы. Ул кәңәшмәләрҙә һүҙ алып, һеҙ нимәләр хаҡында һөйләр инегеҙ?

*Рафаэль АҘНАҒОЛОВ, педагогия фәндәре докторы, профессор:* Уҡытыусыларҙың традицион август кәңәшмәһендә телмәр тоторға тура килһә, мин ошолар хаҡында әйтер инем: яңы уҡыу йылы башлана, ләкин иҫке проблемалар беҙҙең менән ҡала, улар бер ҡайҙа ла китмәне. Улар бик күбәйҙе хәҙер, был хаҡта даими яҙыла, әйтелә тора, тик эш бер ҙә ыңғайламай. Йылдан-йыл туплана килгән мәсьәләләрҙең бөтөнөһө тураһында ла бер юлы һөйләп бөтөрлөк түгел, шуға күрә мин иң беренсе һүҙҙе дәреслектәрҙән башлар инем. Башҡорт телен уҡытыу буйынса өс төркөм дәреслек бар беҙҙә: башҡорт, рус мәктәптәре өсөн һәм башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу өсөн тәғәйенләнгән дәреслектәр. Уларҙың бөтәһе лә балалар өсөн бик ауыр һәм ҡатмарлы. Башҡорт теле әсбаптарын төҙөүсе авторҙар менән ултырып кәңәшләшәйек, фекер-тәҡдимдәр бар, тип, үҙебеҙҙең Мәғариф министрлығына барып әйтеп тә ҡарағаным булды - ҡолаҡ һалманылар. Эшем, вазифам буйынса республикабыҙ мәктәптәре буйлап, бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш районДарҙа, шулай уҡ Силәбе, Ырымбур, Пермь кеүек күрше өлкәләрҙә бик күп йөрөргә тура килде. Башҡорт телен уҡытыу буйынса бай тәжрибә туплаған уҡытыусыларҙың бына тигән методик алымдарына юлыҡтым. Дәреслектәрҙе төҙөүсе авторҙар коллективында ана шундай уҡытыусылар мотлаҡ булырға тейеш, сөнки уларҙың уҡытыу тәжрибәһе - үҙе әҙер дәреслек бит! Ауыр, күңелһеҙ дәреслектәр менән баланы башҡорт теленән биҙҙерергә генә мөмкин, шуға был мәсьәләгә етди ҡарарға кәрәк ине. Башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһенә килгәндә, шулай уҡ милли компонент буйынса һорауҙар килеп тыуғас, былтыр үҙ иҫәбемә Мәскәүгә, РФ Мәғариф һәм фән министрлығына барып ҡайттым. Унда бирәү ҙә башҡорт телен, шулай уҡ Башҡортостан мәҙәниәте һәм тарихын уҡытыуға ҡаршы түгел. "Беҙ һеҙҙең министрлыҡ ебәргән планды раҫлайбыҙ ғына",- тип аңлаттылар миңә. Күп нәмә әлеге үҙебеҙҙең Мәғариф министрлығына бәйле.

Илебеҙҙе йәшәтәбеҙ, юғары мәҙәниәтле, лайыҡлы быуын үҫтерәбеҙ, тиһәк, тыуған телде тергеҙергә, уны балаларға өйрәтергә, күҙ ҡарабыҙҙай һаҡларға бурыслыбыҙ. Башҡорт теле мәктәптәрҙә генә түгел, махсус урта һәм юғары уҡыу йорттарында ла уҡытылырға тейеш. Күрше Татарстанды ҡарағыҙ әле, унда эш тап шулай ҡуйылған. Оптималләштереү, тигән булып, мәктәптәрҙе ябып, уҡытыусыларҙы ҡыҫҡартып, киләсәк быуындың аҡылы иҫәбенә аҡса экономиялау ҙа мәсьәләгә дәүләтсә мөнәсәбәт түгел. Берҙәм дәүләт имтихандары буйынса ла һаман бәхәстән ары киткәнебеҙ юҡ, үкенескә күрә. Ә бит уның да зыяны бик ҙур балалар өсөн. Уҡыу йылы башланыуы була, 11-се кластар мәктәп программалары буйынса уҡымай, БДИ-ға әҙерләнә башлай. БДИ уҡыусыларҙы уйлау, анализлау, фекерләү мөмкинлегенән мәхрүм итә. Яуап варианттарын һайлау өсөн әллә ни аҡыл да кәрәкмәй, яуапты бала үҙе уйлап, эҙләп тапһын, сөнки тормош юлдарында уларҙы бирәү ҙә әҙер варианттар менән көтөп тормаясаҡ.

## ШАҒИР ҺҮҘЕ




### ДОНЪЯЛА КЕМ ЯМАН?

*Ир-азамат бурысы -*
*Ил ғәме тип көймәгән,*
*Иртә-кисен, көндөҙөн*
*Үҙ хәстәрен көйләгән,*
*Тәпәй баҫҡан бишеге -*
*Изге ерҙе бысратҡан,*
*Олоһон да кесеһен*
*"Эһ" тә итмәй илатҡан -*
*Шул яман, ау, шул яман.*
*Ата-баба мираҫы -*
*Әсә телен һанламай,*
*Тау-таш һеңдергән моңдо*
*Ишетһә лә, аңламай,*
*Күҙ ҡабағы шешенеп,*
*Кеше һынын юғалтҡан,*
*Йәне-тәне иҫереп,*
*Бар аҡылын сыуалтҡан -*
*Шул яман, ау, шул яман.*
*Иртәгәһен ҡайғыртмай,*
*Бөгөнгөһөн түңкәргән,*
*Балаһының ризығын*
*Хәмер итеп күтәргән,*
*Эт тә еймәҫ һүҙҙәрҙе*
*Ҡара таштай уйнатҡан,*
*Олатайҙар нигеҙен*
*Уйһыҙ-ниһеҙ болартҡан -*
*Шул яман, ау, шул яман,*
*Шул яман, ау, шул яман.*

✓ *Егерме йыл эсендә илдең халыҡ мәғарифы системаһы концепцияһы, уның бөтөн эшмәкәрлеге һәм йөкмәткеһе - теләйбеҙме беҙ быны, юҡмы - танығыһыҙ булып үҙгәрҙе. Шуныһы ғәжәп: уҡытыусылар шул көйө ҡалды.*



УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ТОРМОШТО ҮҘГӘРТЕР БАҪМА

**"Киске Өфө" гәзитен күптәндән алдырып, яратып уҡып киләм. Уның һәр һанын, оло мөғжизә көткәндәй, түҙемһеҙлек менән көтөп алам. Гәзитте аңлап уҡыған һәм уның тәрбиәүи юҫығын үҙенә һеңдерергә тырышҡан һәр кем үҙенең тормошон ыңғай яҡҡа үҙгәртә, күңел күген яҡтырта алалыр, тигән фекерҙәмен.**

Нисек кенә булмаһын, кеше насар шарттар булыуҙан насар йәшәмәй, ә насар уйлауҙан, негативтан ҡотола алмауҙан насар йәшәй бит. Был тәңгәлдә мин гәзиттең уҡыусыға тәьҫир итеүе йәһәтенән өс төрлө йүнәлештәге асылын билдәләп китер инем:

Беренсенән, гәзит үҙенең мәҡәләләре менән һис уйһыҙ йәшәгән гәмһеҙҙе лә уйланырға мәжбүр итәләр, тием. Ҡайһы ваҡыт күптән борсолоп уйланып йөрөгән ҡайһы бер мәсьәләләр менән гәзиттәге ауаҙдаш фекерҙәргә тап булаһың да, йәнең балҡып китә. Бәхтиһән, тормош ул тиклем үк ҡотһоҙ һәм күңелһеҙ түгел икән дә.

Икенсенән, гәзит, һис һүҙһеҙ, фекерҙәреңде ыңғай яҡҡа үҙгәртә, мейеңде негатив уйҙарҙан арындыра. Был йәһәттән минә бигерәк тә Робин Шарманың, Рауфан Мортазиндың, Самат Мөхәмәтйәновтың мәҡәләләре оҡшай.

Өсөнсөнән, гәзит беҙгә фәһемле сығыштары менән сабыр булырға ла өйрәтә. Беҙ тормошта йыш ҡына аңын-тоңон белмәйенсә, теге йәки был ваҡиғаға, кешегә ҡарата ҡабалан хөкөм сығарырға, баһа бирергә, өҙә һуғырға, ишекте шарт итеп ябырға ашығабыҙ. Ә гәзиттә баҫылған риүәйәттәрҙән күренеүенсә, быға тиклем бик күптәр шундай уҡ хәлдәргә ҡалған, һин кисергәнде кисергән, һин күргәнде күргән икән. Тик улар һәр ваҡытта ла бындай ваҡиғаларҙы нисек бар шулай ҡабул итеп, уларҙың шөйҡанын үҙҙәренә тейҙермәй үткәреп ебәрә алған. Һабаҡ һәм ғибрәт алабыҙ ундайҙарҙан. Рәхмәт шуның өсөн гәзитебеҙгә.

**Зәфәр КИЛДЕБАЕВ.**
**Баймаҡ районы Мерәҫ ауылы.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Август аҙағына тиклем уҡыусыларыбыҙға 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 2014 йылдың тәүге ярты һы өсөн 2013 йылғы хаҡтар менән, йәғни 378 һум 36 тингә яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Сентябрҙән хаҡтар үҙгәрәсәк.**

● Шулай итеп, август айында 2014 йылдың тәүге ярты һы өсөн гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - **2014 йылға "Башҡортса дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● **Әйткәндәй,** 2013 йылдың икенсе ярты һы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға әле лә һуң түгел: 17 августҡа тиклем яҙылһағыҙ -сентябрҙән, 17 сентябргә тиклем яҙылһағыҙ, гәзитебеҙҙе октябрҙән алдыра башларһығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru.** Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Был көндәрҙә мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәләре уҙ эшен башланы. Ул кәңәшмәләрҙә һүҙ алып, һеҙ нимәләр хаҡында һөйләр инегеҙ?*



*Миңдебай ЮЛМӨХӘМӘТОВ, педагогия фәндәре кандидаты, Башҡортостандың - атҡаҙанған, Рәсәйҙең почетлы мәғариф хеҙмәткәре, 1986-2005 йылдарҙағы БР Мәғариф министры урынбаҫары:* Август кәңәшмәләре беҙҙең мәғариф учреждениеларын йыллыҡ эш һөҙөмтәләрен барлау ғына түгел, ә киләсәккә йүнәлеш биреүсе сара ла ул. Быйыл кәңәшмәләр бик ҡыҙыу булырға тейеш, тип уйлайым мин, сөнки мәғариф өлкәһендә кисекмәҫтән хәл ителәргә тейешле бик күп етди проблемалар тупланды. Бында үҙебеҙҙең урындағы республика Мәғариф министрлығын ғына ла ғәйепләп булмай, сөнки беҙ Рәсәй Федерацияһы ҡабул иткән закондарға буйһонабыҙ. Ә был закондарҙың күпселек осраҡта төбәктәр үҙенсәлеген, урындарҙағы шарттарҙы һанламауы бик аптырата. "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" яңы законға әмәт бағланғайны, үкенескә ҡаршы, ул аҡланманы - бер ниндәй яңылыҡ та юҡ, ә булған положениелар тейешенсә үтәлмәй. Мәҫәлән, мәктәптәр сход ҡарарынан тыш ябылмай, тиҙәр ҙә ул, ләкин мин белергә теләр инем: республикалағы меңгә яҡын ябылған мәктәптең ҡайһыныһы сход ҡарары нигеҙендә ғәмәлгә ашырылды икән?

Оптималләштереүҙең дә бер генә ыңғай яғы ла күренмәй. Ә инде уның уҡытыу сифатына бермә-бер кире йоғонто яһаясағында шик тә юҡ, сөнки бер нисә класты берләштереп уҡытыу ул балаларҙың башын ғына бутаясаҡ. Кәңәшмәлә барасаҡ етди һәм ҡыҙыу һөйләшеүҙә башҡорт телен уҡытыу тураһында мотлаҡ һүҙ алып барылырға тейеш, юғиһә, был мәсьәлә хәҙер тулыһынса мәктәп директорҙары ҡарамағына ҡалдырылды: теләһәләр - уҡыталар, теләмәһәләр - юҡ, булып сыға түгелме? Был бит күрәләтә закон боҙоу! Республика Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың үҙе ҡабул иткән закондан артҡа сигенеү күренеше, йомшаҡ итеп әйткәндә, аңлашылып етмәй. Дәүләт теле булараҡ та, туған тел булараҡ та башҡорт телен уҡытыуҙа элек өлгәшелгәндәрҙән күпкә кире ҡайтыуҙы шул рәүешле был мәсьәләнән әкренләп кенә ҡотолоу яйын күреү тип аңларға була.

Яңы законға бәйле тағы бер мәсьәлә борсой мине. Ул да булһа, дөйөм урта белем биреү учреждениеларын бөтәһен бер кимәлгә күсереп, йәғни гимназиялар, лицейҙарҙы бөтөрөп, уларҙы ябай мәктәп статусында ҡалдырыуҙың туранан-тура һәләтле балаларҙы үҫтереү программаһын юҡҡа сығарыу хәүефе менән янауын да күрмәү мөмкин түгел. Ә инде хәҙер нисә йыл халыҡ теләнән төшмәгән БДИ тураһында мин, был яһалма уйлап сығарылған кәрәкмәгән нәмә ул, тип әйтер инем. Интернетта әҙер яуаптар бирелеүе, был өлкәлә коррупцияның сәскә атыуы бер ҙә генә белемдә объектив баһалау файҙаһына һөйләмәй бит.

*Сәбилә СӨЛӘЙМӘНОВА, педагогия фәндәре кандидаты, доцент, 1985-1988 йылдарҙағы БР Мәғариф министры, РФ һәм БР Мәғариф отличнигы:* Егерме йыл эсендә илдең халыҡ мәғарифы системаһы концепцияһы, уның бөтөн эшмәкәрлеге һәм йөкмәткеһе - теләйбеҙме беҙ быны, юҡмы - танығыһыҙ булып үҙгәрҙе. Шуныһы ғәжәп: уҡытыусылар шул көйө ҡалды. Заманына ярашлы, мәктәптәрҙә техник йыһазландырыуға ҙур иғтибар бирелә, шуға күрә лә информатика уҡытыусыһы ғына түгел, башҡалар ҙа заман арбаһынан төшөп ҡалырға тейеш түгел. Сөнки балалар зирәк, уҡытыусынан да күберәкте белгәндәре бар. Уҡытыусының элекке абруйын ҡайтарыу өсөн ул һәр йәһәттән өлгө булырға, белем кимәлен, интеллектын күтәреү буйынса даими шөғөлләнергә бурыслы. Икенсе проблема - оптималләштереү мәсьәләһе беҙҙең быуын уҡытыусылары өсөн яңылыҡ түгел, әлбиттә. Мин педучилище тамамлап, эшләп йөрөгән осорҙа ла шундай тулҡын булып алғайны, сөнки һуғыш осоро һәм унан һуңғы йылдарҙа билдәле сәбәптәр менән тыуым кәмене, ләкин балалар һанының аҙ булыуы мәктәптәрҙе ябырға нигеҙ бирмәй, сөнки үҙгәртеп ҡороу йылдарында бик күп ауылдарҙа яҡшы типовой мәктәптәр төҙөлгәйне бит, хәҙер улар, тәҙрәләре өңөрәйеп, буш торораға тейешме ни? Улай булһа, уларҙы ла ташландыҡ фермалар яҙмышы көтә түгелме? Стена кирбестәренә тиклем һүтеп алып бөтмәҫтәр, тимә! Ябыуҙан да еңеле юҡ инде, ә быны мәсьәләне хәл итеү юлдарын эҙләү менән бер кем дә баш ватырға теләмәй. Нисә бала булһа ла уларҙы үҙ ауылдарында уҡытырға тырышырға кәрәк. Бөлки, балалар баҡсалары менән мәктәпте берләштереү кәрәктер -юлдарын эҙләргә, табырға кәрәк. Балалар иҫәбенә экономия яһау - ул ҙур хата. Унан бит мәктәбе юҡ ауылдың киләсәге лә юҡ, тип бик дөрөҫ әйтәләр. Әгәр ҙә был халыҡҡа ҡаршы реформаларҙың бөтөн маҡсаты аҡса һыҡыу икән, ана, халыҡ байлығын үҙләштергән олигархтарҙың кесәләрен һыҡһындар, әйҙә.

*Радик ӨМӨТКУЖИН, Әбйәлил районы Хәлил урта мәктәбенең башҡорт теле уҡытыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы:* Мәктәп - ул үҙе бер бәләкәй генә дәүләт һымаҡ бит инде, ә һәр дәүләттең үҙ сәйәсәте бар. Шуны тормошҡа ашырып, ул тыныс ҡына йәшәргә, үҫергә, балалар тәрбиәләргә, уларға белем бирергә тейеш. Ә беҙҙең мәктәптәр чиновниктар менән сәйәсмәндәрҙең ҡаңғырығы араһында буталып, аяҡ аҫтында сыбалыуын дауам итә. Беҙҙә мәктәптәргә уның төп бурысын ғәмәлгә ашырырға йүнләп ирек бирмәйҙәр. Уҡытыусылар даими рәүештә көсөргәнеш хәлендә: бөгөн эшләй, ә иртәгәһен ни булырын уйларға ла ҡурҡа. Мәктәпте мин ниңәлер балаларын уҡытып, уларға лайыҡлы тәрбиә бирергә тырышҡан әсә ролендә күрәм. Шул ваҡыт атай образындағы дәүләтебеҙ, өйҙәге тыныслыҡты боҙоп, балаларға дәрес әҙерләргә ҡамасаулай, кәрәкле-кәрәкмәгән талаптар ҡуйып, әсәнең башын ҡаңғырта...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Өфө районы буйлап эш сәфәре һуңында урындағы халыҡ менән аралашты. Аграр секторҙы үҫтереү буйынса Өфө районы республикала биш иң көслө төбәк иҫәбенә инә. Осрашыуҙа ҡатнашыусылар республика етәксеһенә үҙҙәрен борсоған һорауҙар менән мөрәжәғәт итте. Нигеҙҙә, улар медицина, мәктәпкәсә белем биреү, ер мөнәсәбәттәре өлкәләренә ҡағылышлы булды.

✓Башҡортостан Президенты Өфө районы буйлап эш сәфәре барышында "Николаевка" агросәнәғәт комплексының теплица хужалығында булды. Хужалыҡта майҙаны ике гектар тәшкил иткән заманса теплица комплексы төҙөү планлаштырыла. Бындай комплекста йыл әйләнәһенә уңыш йыйыу ҡарала. Киләсәктә агросәнәғәт комплексы биогаз ҡоролмаһы һатып алырға планлаштыра, ул ҡошсолоҡ фабрикаһының ҡалдыҡтарын эшкәртеп, теплицаларҙы йылытыу өсөн энергия бирәсәк.

✓Башҡортостан Президенты "Өфөмебель" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең етештереү майҙансыҡтарында булды. Предприятиела айына 120 миллион һумлыҡ продукция етештерелә, бында 500-ҙән ашыу кеше эшләй. Уртаса айлыҡ эш хаҡы 31 мең һум тәшкил итә. Предприятие продукцияһы 600 мебель салонында һатыла, бынан тыш, "Өфөмебель" үҙенең ваҡлап һатыу селтәрен үҫтерә.

✓Республика Президенты "Башҡортостан" ҡошсолоҡ фабрикаһында булды, йомортҡаны сорттарға айырыу буйынса донъялағы иң ҡеүәтле машинаны ҡараны. Предприятие эшмәкәрлегенең төп йүнәлеше - йомортҡа етештереү. Көн һайын бында - 1,25 миллион дана, йылына 450 миллион дананан ашыу йомортҡа етештерелә. Шулай уҡ бында йыл һайын ике мең тоннанан ашыу ҡош ите етештерелә.

✓2013 йылғы Сурдлимпия уйындарында дөйөм команда иҫәбендә Рәсәй йыйылма командаһы 67 алтын, 52 көмөш һәм 58 бронза миҙал яуланы. Башҡортостан спортсылары ла был уңышҡа үҙ өлөшөн индерҙе: яҡташтарыбыҙ 9 алтын, 5 бронза һәм бер көмөш миҙал менән ҡайтты. Алтын миҙалдарҙың күбеһен беҙҙең дзюдосылар яуланы.

***✓ Диндар кеше һәр ауыртыуҙы, һәр һыҙланыуҙы, һәр әрнеүҙе йәнен тәхет иткән Иблис итеп түгел, ә Аллаһы Тәғәләнең үҙенә ебәргән һынауы итеп ҡабул итә.***

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ҠАЙҺЫ ЕРЕҢ АУЫРТҺА...

## йәнең шул ерҙә

**Медиктар фекеренсә, кеше организмы 45 del-ға (del - ауыртыуҙың үлсәү берәмеге) тиклем ауыртыуҙы күтәрә ала икән. Ауыртыу был кимәлдән артҡан осраҡта кеше шок хәленә инә һәм иҫен юғалта йә аңын юя. Ә ҡатындар бала тыуҙырған саҡта 57 del берәмегенә тиклем ауыртыу тойғоһон күтәреүгә һәләтле. Был бер юлы кешенең 20 һөйәге һынған саҡта тойолған ауыртыуға тиң. Тап шуның өсөн дә күп кенә әсәләр донъяға тыуған сабыйының тәүге илауын ишетмәй ҡала, баҡтиһәң.**

**"Бер төрлө ауыртыу икенсеһен кәметеүгә булышлыҡ итә. Әгәр ҙә һеҙ теше һыҙлаған бесәйҙең ҡойроғона баҫһағыҙ, ул бынан тик кинәнес кенә аласаҡ", тигән яҙыусы һәм медик Антон Чехов. "Мөхәббәт - ул йөрәктең теш һыҙлауы", тигән Генрих Гейне. "Ауыртыу - аң уяныуы ҡорамалы", тигән тағы ла бер билдәһеҙ аҡыл эйәһе. Ә беҙҙең халыҡта иһә "Ауыртмаған башҡа - тимер таяҡ", "Йөрәге һыҙламағандың башы ауырта", "Ҡайһы ерең ауырта, йәнең шул ерҙә" тигән әйтемдәр бар. Әлбиттә, уларға һалынған кинәйәләр физик кисерештән дә киңерәк донъя, йәшәйеш хаҡында фәлсәфәүи мәғәнәгә эйә.**



Бер мәл дин юлындағы ҡатындың йортона ауыртыу (һыҙлау, әрнеү) ишек ҡаҡҡан. Хужабикә уны йылмайып ҡаршы алған.

-Һау ғынамы, ауыртыу! Ә мин һине һәр ваҡыт иҫемдә тоттом, килереңде әҙерләнеп көттөм. Килер-килер булғасың, былай ғына, эш юҡта эш булһын, тип йөрөмәйһеңдер: һине миңә яуызлыҡ алып килгәндер ҙә, ауылыбыҙға изгелек үткәргәндер, тип уйлайым. Килгәсең, әйҙә, йортома рәхим ит. Ана мин һиңә өйөмдөң иң төпкө, күренмәгән ҡараңғы мөйөшөнән урын әҙерләгәнмен...

Ҡунаҡҡа хужабикәнең ихтыярына буйһоноуҙан башҡа юл ҡалмаған. Әммә ул шулай ҙа:

-Ҡалай уңайһыҙ булды һиңә килеп. Ғәҙәттә, беҙ кешеләрҙең өйөнә көтмәгәндә килеп инеп, уларҙың ҡотон алырға яратабыҙ. Ундайҙар тәүҙә беҙҙе өйҙәренең тупһаһынан үткәрмәҫкә тырышып, ҡаршы тороп маташа. Ул сағында беҙҙе алып килеүселәр ярҙамға ташлана, улар ишектәрҙе емереп инеп, хужаларҙың үҙҙәрен иң төпкө, иң ҡараңғы мөйөштәргә быраҡтырып, беҙҙе түргә мендереп ултырта. Хужалар гүргә ингәнсе беҙҙең урын түрҙә, тамағыбыҙ балда-майҙа була. Улар беҙҙе ҡыуалап та сығара алмай, ҡәҙер итмәйенсә лә хәлдәре юҡ, - тип хужабикәгә үпкәһен белдерергә лә онотмаған.

-Ә ниңә улар һеҙҙе шулай ҡәҙер итәләр һуң? - тип һорай ҡуйған хужабикә.

-Беҙ кешеләрҙең иң ныҡ ауыртҡан, иң һыҙлаған, иң әрнегән ерендә ултырабыҙ шул. Беҙҙең түр ҙә, тәхет тә нәҡ шул урында, - тигән был өйҙә үҙен ҡәҙерле ҡәҙерһеҙ итеп тойған ауыртыу.

-Һуң, ул ауыртыуҙы һүҙ, үлән менән дауалап, иң һуңғы сиктә бысаҡ менән ҡырҡып алып ташлап була бит, - тигән тағы ла нығыраҡ аптырауға ҡалған хужабикә.

-Кешенең ҡайһы ере ауырта, йәне шул еренә күсә шул. Беҙ ана шул йәнгә йәбешәбеҙ ҙә инде. Беҙҙең түр ҙә, тәхет тә йән материяһынан эшләнә. Ә бына һинең өйөңдә миңә бик ҡыйынға тура киләсәк. Күңелһеҙ буласаҡ. Бында килгәнемә инде күпме, ә һин миңә һис юғы иғтибар итеү генә түгел, минең хаҡта уйламаның да шикелле. Мин витаминдар, наркотиктар, спиртлы эсемлектәр, тәмәке яратам, ә һин миңә һис юғы үлән сәйе лә эсермәнең...

Ауыртыуға артабан хужабикә бер ни тип тә яуап бирмәгән. Ҡәҙерле ҡәҙерһеҙ ҡунаҡ ҡараңғы мөйөшөндә астан-ас бер нисә көн ҡаҡланып, сарсап яҡкан да, "рәхимһеҙ" хужабикәнең йортон мәңгелеккә ташлап китергә мәжбүр булған. Ауыртыуҙар, һыҙлауҙар, әрнеүҙәр үҙҙәрен иҫкә төшөрмәгән, иғтибар итмәгән "өйҙәрҙә" оҙаҡ тотҡарланмайҙар шул. Улар бик ғорур, тәкәббер заттан. Ауыртыуҙың был йорттан сығып киткәнен бәхетле хужабикә һәм уның ғаилә ағзалары бөтөнләй һиҙмәй ҙә ҡалған. Гүйә, ауыртыу уларҙың йортона аяҡ та баҫмаған һымаҡ булған.

Ә ғүмер буйы ауыртыуҙан ҡурҡҡан күршеләренең өйөн ул бик еңел яулап алған. "Ә беҙҙең күршенең йорто бик үк ныҡ та түгел һымаҡ ине, ә ул ауыртыуҙы нисек еңә алды икән?" тигән аптырауға ҡалған күршеләре үҙҙәренең йортона хужа булып алған ауыртыу тойғоһона ярарға тырышып, уны төрлөсә хеҙмәтләндереп.

Был тарихтан күренеүенсә, дин юлындағы хужабикә ауыртыу тойғоһона үҙенең йәне менән идара итергә мөмкинлек бирмәгән. Йән менән идара итеүгә өлгәшкән ауыртыу, һыҙланыу, әрнеү был организмдың ханына, батшаһына, күп осраҡта, Иблискә әүерелә. Иблис иһә, үҙ эшен белә: спиртлы эсемлек, наркотик таптыра, хужаһының ауыҙына тәмәке ҡаптыра.

Психологтар депрессияны кешенең көсһөҙлөгө, ихтыярһыҙлығы күренеше тип атау яғында түгел, улар: депрессия - ул кешенең оҙайлы ваҡыт ауыртыуға түҙергә тырышыу күренеше, ти. Ә дин әһелдәре иһә, депрессия, ғөмүмән, юҡ, ә бары тик Аллаһы Тәғәләгә ышанмау ғына бар, тип белдерә. Был дилемма философияның "Инҡар итеүҙе инҡарлау" законына оҡшаған. Ауыртыу, һыҙланыу, әрнеү булмаһа, быларға түҙеү, сыҙау, түҙемлек, сабырлыҡ булмаһа - тәүгеләре юҡ. Беҙҙеңсә, дини аңлатма һәр йәһәттән отошлораҡ: диндар кеше һәр ауыртыуҙы, һәр һыҙланыуҙы, һәр әрнеүҙе йәнен тәхет иткән Иблис итеп түгел, ә Аллаһы Тәғәләнең үҙенә ебәргән һынауы итеп ҡабул итә.

Ауыртыу хаҡында тағы бер риүәйәт-тарих. Румиға бер мәл йөрәге ныҡ ауыртҡан кеше килгән дә:

-Мин барлыҡ төрлө дарыуҙарҙы ҡулланып ҡараным, файҙаһы булманы. Миңә берәр нисек ярҙам итә алмайһығыҙмы? - тип һораған.

Руми уны иғтибар менән интуитив рәүештә күҙ һынауы аша үткәргән дә:

-Миңә ҡайсы алып килегеҙ, - тигән.

-Һеҙ ҡайсы менән минең йөрәкте ҡырҡырға уйламайһығыҙҙыр ул? - тигән тик кенә ултыра алмаған ауырыу, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә.

-Мин хирург түгел, икенсенән, ҡайсы менән йөрәккә операция яһауҙары тураһында ошоғаса ишеткәнем юҡ ине, - тип көлөмһөрәгән Руми.

Ҡайсы алып килгәндәр. Осҡа ауырыуҙың кейгән жилетының бер төймәһен ҡырҡып алған да, унда башҡаса төймә таҡмаҫҡа һәм ҡулы менән төймә урынына ҡағылмаҫҡа ҡушҡан.

Ауырыу ҡайтып китер алдынан Руми уға теүәл ике аҙнанан тағы ла килеүен һораған, был ваҡытҡа уның йөрәге һауығыры хаҡында әйтеп өмөтләндергән. Пациент дауалаусыһы әйткәндәрҙең барыһын да үтәгән һәм теүәл ике аҙнанан йөҙө ҡояштай балҡып килеп ингән.

-Әле генә табибта булдым. Ул минең йөрәкте тыңлап ҡараны ла, барыһы ла яҡшы булыуы хаҡында белдерҙе. Һеҙ минең менән нимә эшләнегеҙ ул, әфәндем? Төймәмдән шайтанды ҡыуып сығарҙығыҙмы? - тигән, шатлығын ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә.

-Һеҙ ҡулығыҙҙы һәр ваҡыт жилетығыҙҙың йөрәк тапҡырындағы шул төймәһендә тотоп, төймәгеҙ менән уйнап йөрөгәнһегеҙ. Ул төймәгеҙ һәр ваҡыт һеҙҙең йөрәкте ашаусы, кимереүсе шул "бире" булған да инде. Мин ул төймәгеҙҙе ҡырҡып алып һәм ул тирәгә ҡулығыҙҙы алып бармаҫҡа ҡушып, йөрәк тапҡырын һәм нервыларығыҙҙы уйнатыуҙан, йәнегеҙҙе бер туҡтауһыҙ маҙаһыҙлауынан ҡотҡарҙым, - тип яуап биргән Руми уға көлөмһөрәп.

Ҡайһы ерең ауырта, йәнең шул ерҙә шул. Кешелек өсөн дә, милләт өсөн дә был тәбиғи тойғо, инстинкт кимәлендә нығынған һәләт. Йәнен һаҡларға теләгән һәр тере организм тәүге ауыртыу сигналдары килеү менән сәбәп ҡылырға тотона. Ошо урында икенсе бер халыҡ әйтеме иҫкә килеп төшә: "Йөрәге һыҙламағандың башы ауырта". Хәйер, был хаҡта алдағы һандарҙа һүҙ алып барырбыҙ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республикала биотехнологиялар инжиниринг үҙәген төҙөү буйынса проектты тормошҡа ашырыуға Башҡортостан 2013 йылда федераль бюджеттан 50 миллион һумдан ашыу аҡса алырға планлаштыра. Башҡортостанда биотехнологияларҙы үҫтереү һәм уларҙы ауыл хужалығында ҡулланыу мәсьәләләре буйынса кәңәшмәлә республика Президенты Рөстәм Хәмитов билдәләүенсә, беҙҙә биотехнологиялар өлкәһендә эшләгән һәм биотехнология продукттары етештергән бер нисә предприятие бар.

✓Федераль дәүләт статистикаһы хеҙмәтенең 2012 йылғы мәғлүмәттәре буйынса РИА Рейтинг тирә-яҡ мөхиткә зарарлы матдәләр бүлеп сығарған иң ҙур ҡалалар исемлеген төҙөгән. Исемлеккә 100 ҡала ингән, улар араһында Башҡортостандың дүрт ҡалаһы бар. Миллионлы халҡы булған Өфө 13-сө урында тора. Үткән йылда тирә-яҡ мөхиткә бүленеп сыҡҡан зарарлы матдәләр күләме 205,5 мең тонна тәшкил иткән. Һуңғы ике йыл эсендә күрһәткес 24,5 процентҡа кәмегән. Стәрлетамаҡ - 43-сө урында. 51-се баҫҡыста Благовещен урынлашҡан. Салауат ҡалаһы (155 мең кеше) 62-се урынды биләй.

✓2015 йылда Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советы ултырышын һәм БРИКС дәүләттәре һәм хөкүмәттәре башлыҡтарының осрашыуын үткәреүгә әҙерлек сиктәрендә 21-25 августа Өфөлә Халыҡ-ара йәш журналистар, фотохәбәрселәр һәм блогерҙар форумы үтәсәк. Унда Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләттәр һәм Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары вәкилдәре ҡатнашасаҡ. Өфөгә илдең миллионлы ҡалаларында йәшәгән журналистар һәм блогерҙар араһында иғлан ителгән асыҡ конкурста еңеү яулаған ун кеше киләсәк.

✓БР Яҙыусылар союзы 1 августан 31 октябргә тиклем "Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге әҙәби премия"ға дәғүә итеүселәрҙән эштәр ҡабул итә. Премияға тәҡдим ителгән эштәр күрһәтелгән көнгә тиклем кәмендә бер йыл эсендә матбуғатта баҫылып сыҡҡан булырға тейеш. Дәғүәселәрҙең йәше сикләнмәй. Ғаризалар 450076, Өфө ҡалаһы, Коммунистик урамы, 34 адресы буйынса БР Яҙыусылар союзында ҡабул ителә. Телефон: 273-30-47.

**“Башинформ”дан**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

## ҒАФУРИҘЫҢ...

### "Ғашиҡтар ағасы"

**Баш ҡаланың Киров районында территорияны төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү эше дауам итә. Ошо көндәрҙә Мәжит Ғафури урамындағы скверҙа тротуар плиталарын алмаштыра башланылар.**

Төҙөкләндереү эшмәкәрлеге быны менән генә тамамланмаясаҡ. Скверҙа "Ғашиҡтар ағасы" һәм "Асыҡ китап" композициялары барлыҡҡа киләсәк. Улар баш ҡаланың башҡа иҫтәлекле урындары кеүек үк, үҙҙәренең ғүмер байрамдарын билдәләгән төрлө йәштәге парҙарҙың, шулай уҡ тормош ығы-зығыһын бер ситкә ҡуйып, матур ял итергә теләүселәрҙең яратҡан урынына әүерелеренә ышаныс ҙур. Сөнки бында яңы 63 яҡтыртыу сығанағы ҡуйыласаҡ, 23 эскәмйә урынлаштырыласаҡ, газондар яңыртыласаҡ һәм ағастар ултыртыласаҡ. Ҡыҫҡаһы, саф һауала ял итеү һәм тормошондоң бер миҙгелен мәңгеләштереү өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырыласаҡ.

## КИНОҒА КИЛЕГЕҘ!

### Инеү бушлай!

**"Өфөнет" компанияһы һәм "UTV" каналы тарафынан Өфө ҡала округы хакимиәте ярҙамында ойошторолоп, былтыр тәүгә тапҡыр уҙғарылыуына ҡарамаҫтан, биш мең самаһы тамашасыны йыйған "Асыҡ кино" сараһы быйыл 15 августа үтәсәк.**

Киске сәғәт унда Конгресс-холл артындағы майҙанда асыҡ һауала бушлай кино ҡарарға мөмкин буласаҡ. Был яңылыҡ бигерәк тә Тим Бертондың ижадын яратыусылар өсөн ҡыуаныслы, сөнки тамашасы иғтибарына тап ошо режиссерҙың "Крупная рыба" фильмы сығарыласаҡ. Шулай уҡ йыйылыусыларға концерт программаһы тәҡдим ителәсәк һәм күптән түгел Тимур Бекмәмбәтов бер өлөшөн Өфөлә төшөргән "Елки-3" комедияһынан өҙөк күрһәтеләсәк.

## СОЧИ УРАМЫН...

### һыу баҫмаясаҡ!

**Билдәле курорт ҡалаһы исеме менән аталһа ла, баш ҡала халҡы өсөн Сочи урамы яҙлы-көҙлө ҡойма ямғырҙар башланғанда урамдарҙан аҡҡан йылғанаҡтар буйынса нығыраҡ билдәле.**

Сөнки был урамда бер ваҡытта ла ямғыр һыуҙарын ағыҙыу системаһы булмаған һәм йыйылған "дарья" үҙ юлын үҙе таптан. Был йәйәүлеләргә лә, автотранспорт эйәләренә лә, ошо урамда йәшәүсе халыҡҡа ла күп ҡатмарлыҡтар тыуҙырған. Ниһайәт, ҡала округы хакимиәте "курортсыларға" ла уңайлы тормош тыуҙырырға ҡарар итте һәм 5 августан 9 сентябргә тиклем Кавказ урамынан Пугачев урамына тиклемге араурыҡта ремонт эштәре башланасаҡ. Канализация линияһына диаметры 1000 миллиметрлыҡ торбалар һалынасаҡ. Линия юлдың уртаһынан үтәсәк, ә инде уның тармаҡтары барлыҡ юлды һәм тротуарҙы хеҙмәтләндерәсәк. Юл буйҙарында ямғыр һыуҙары ағып төшәсәк махсус "койо"лар урынлаштырыласаҡ.

Ремонт эштәре барған ваҡытта 211-се, 232-се, 234-се, 247-се, 280-се, 284-се маршрут автобустары урау юл схемаһы буйынса - С. Перовская, Кавказ, Менделеев, Сочи урамдары - хәрәкәт итәсәк. Шулай уҡ "Башавтотранс" автобустарының маршруты ла үҙгәрәсәк.

ӘЙТӘГҮР!

# ЮҒАРЫ БЕЛЕМЛЕ БУЛ...

## энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙып булһа ла



**"Ниндәй ул бөгөнгө абитуриент?" тигән һорау ҡуйҙыҡ баш ҡаланың юғары уҡыу йорттарына документтарын тапшырырға йә ниндәйҙер белешмә, мәғлүмәт алырға килгән абитуриенттарға һәм уларҙың ата-әсәләренә.**

**Рәүиә САБИТОВА, Өфө ҡалаһы:** Бөгөнгө абитуриент, моғайын да, киләсәген хәстәрләп, күҙаллап эш итеүсән йәш кешелер, тип уйлайым. Быуа, мәҫәлән, быйыл минең Сынбулат улым да мәктәпте тамамланы. Заман талаптарынан сығып, киләсәктә ниндәй өлкәләгә һөнәр эйәләре кәрәк буласағын бер аҙ яҡынса күҙаллап, кәңәш-төңәш итеп, киләсәгебеҙ халыҡ-ара иҡтисад, баҙар мөнәсәбәттәре үҫешенә бәйле булыуын иҫәптә тотоп, улым иҡтисад һәм сит телдәр уҡытыу ҡаралған Мәскәүҙәге юғары уҡыу йорттарына документтарын тапшырҙы. Был вуҙдарҙа кәмендә ике сит теле төптән өйрәтелеүе яҡшы булды. Әлеге көндә оло түҙемһеҙлек менән һөҙөмтәләр көтәбеҙ. Хәҙер киләсәген хәстәрләгән балалар һаны арта, юғары уҡыу йортон һайлағанда күбеһе бында нимә өсөн килеүен аңлап, алдарына ҙур маҡсаттар ҡуйып килә, тип уйлайым. Улым да Берҙәм дәүләт имтихандарына ике йыл дауамында әҙерләнде, шәхси уҡытыусыларҙан рус һәм инглиз телдәре буйынса дәрестәр алды. Ул башта уҡ Мәскәүгә уҡырға барырға теләк белдергәйне, беҙ ундағы юғары белем биреү йорттарындағы талаптар ниндәй булыуын әйткәс, үҙе үк тырышып, уҡыуын яҡшыртты. Хәҙер йәштәр юғары белем һәр кемгә кәрәк булыуын үҙҙәре лә аңлап тора. Ни тиһәң дә, юғары белеме булған кеше тормошон дөрөҫ йүнәлештә ҡора ала, ниндәй генә ауыр хәл килеп тыуыуға ҡарамаҫтан, унан сығыу юлдарын таба белә. Беҙ йәш саҡта "өсөнсө донъя илдәре" бар, унда кешеләр эшһеҙлектән, аслыҡтан йонсой, тип күпме һөйләнеләр. Кешенең икмәк табырлыҡ та кәсебе, шөғөлө юҡлыҡтан был. Белемле, уҡыған, төрлө яҡлап үҙен аса алған кешенең шундай аслыҡ булған ваҡытта ла үҙенә, ғаиләһенә икмәк табып ашатыр өсөн бер-нисә варианты була. Һәр хәлдә, ул алма беш, ауыҙыма төш, тип ҡул ҡаушырып ятмаясаҡ. Шуға күрә, киләсәктә мәктәптәрҙә бер-нисә төп предметтан тыш, ҡалғандары түләүле буласаҡ, тигән интернет селтәрен тултырған мәғлүмәт хайран итте. Беҙ юғары белемле шәхес итеп баланы дәүләт өсөн тәрбиәләп үҫтерәбеҙ бит. Дәүләттең киләсәгә шул түләп уҡыясаҡ балалар ҡулына ҡалһа, әлеге көндә юғары белем биреү йортон түләүле бүлектә уҡып тамамлаусы йәш белгестәргә ҡарап, күҙаллап, ҡурҡып та ҡуяһың инде...

**Айзилә МУСИНА, Баймаҡ районы, абитуриент:** Мин Башҡорт дәүләт университетының "Журналистика", "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, сит теле" бүлектәренә, Өфө дәүләт сәнғәт академияһының "Кылкумыҙ" бүлегенә документтар тапшырғайным. Һөҙөмтәлә, өс урынға ла уҡырға инеүем асыҡланды. Оҙаҡ ҡына уйланa торғас, Башҡорт дәүләт университетының "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, сит теле" бүлеген һайланым. Сөнки сит телдәрҙе белеүселәргә яҡшы эш урыны табыуы еңелерәк. Етмәһә, хәҙер эш тәҡдим итеүселәрҙең талаптары ла сит телде мотлаҡ белеүҙе бурыс итеп ҡуя бит. Бөгөнгө көндә техник бер биреүсе юғары уҡыу йорттары ла бик популяр, әлбиттә. Әммә уны тамамлаусы белгестәргә лә инглиз телен аңлау талап ителә. Шуға күрә, сит телде өйрәнеүгә өҫтөнлөк биреп яңылышмағанмын, тип уйлайым. Ҡайһы бер тиҫтерҙәремдең ниндәй уҡыу йортона инә алалар, шул йүнәлештә киteүҙәрен күп күҙәтәм. Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырғас, балдары ҡайһы уҡыу йортонда уҡырға мөмкинлек бирә, шунда бара ла ҡуялар. Шунан бер нисә айҙан күңелдәре ятмаған уҡыу йортон ташлап ҡайталар, йә илке-һалҡы йөрөп белем ала башлайҙар. Бындай хәл килеп тыумаһын өсөн аңлы рәүештә үҙ алдына маҡсат ҡуйып, шуға табан ынтылырға кәрәк, тип иҫәпләйем.

**Йәлил ҒӘСКӘРОВ, Әбйәлил районы, абитуриент:** Бөгөнгө көндә һөнәр һайлауы еңел, тиҙәр. Сөнки кешенең, техниканың мөмкинлектәре күп, интернет бар, Берҙәм дәүләт имтиханы бер ваҡытта әллә нисә урынға имтихан тапшырырға булышлыҡ итә, кәрәкле мәғлүмәтте туплау ҙа ауыр түгел. Әммә мәктәпте тамамлаусы йәш кешегә ошо бихисап уҡыу йорттары, ундағы йүнәлештәр араһынан бер генә аныҡ бүлекте һайлап алыуы ауыр, тип иҫәпләйем. Айырыуса ауыл балалары өсөн ҡыйынрыраҡҡа тура килә. Әлбиттә, хәҙер ауыл мәктәптәрендә лә балалар интернет селтәре аша мәғлүмәт ала, шәхси репетитор ҙа яллай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡалаға барғас, бер аҙ юғалып ҡалаһың. Мин дә баш ҡалаға документтарымды тапшырырға килгәс, ҡайһы уҡыу йортоноң ишеген асып инергә икән, тип баҙап ҡалдым. Өфө дәүләт авиация техник университеты, Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис академияһы, Башҡорт дәүләт университетының техник факультеттарының күңелгә ятҡан йүнәлештәрен һайлап, документтарымды тапшырып ҡайттым. Юғары уҡыу йортонда техник һөнәр үҙләштергән егет кеше өсөн һәр ваҡыт эш табыласаҡ, тип уйлайым. Энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙып булһа ла юғары белемле булырға тырышыу кәрәк. Хәҙер һөҙөмтәләрен көтөргә генә ҡалды. Конкурс ҙур, әммә теләгемә өлгәшермен, тип өмөтләнәм.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Силәбелә башҡорт йәштәре йәмғәт ойошмаларының "Йәштәр йыйыны" исемле тәүге форумы үтте. Сараны ойоштороусы булып Силәбе өлкәһенең Башҡорт йәштәре иттифаҡы сығыш яһаны. Съезд эшендә башҡорт йәштәренең төрлө йәмғәт хәрәкәттәре һәм ойошмаларынан 50-нән ашыу делегат ҡатнашты. "Йәштәр йыйыны" инициативалы йәштәрҙе берләштереү юлында яҡшы башланғыс булып тора. Түңәрәк өҫтәл үткәреү барышында социаль характерҙағы айырым йүнәлештәр билдәләнде, шулай уҡ әлеге форумды йыл һайын фәнни-ғәмәли конференция форматында уҙғарыу тураһында ҡарар ҡабул ителде", - тип хәбәр итте Силәбе өлкәһенең Башҡорт йәштәре иттифаҡы рәйесе Әлфир Илбаҡтин.

✔Баш ҡаланың мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре яңы акция әҙерләй: 12 сентябрҙә Өфөлә "Театрҙар төнө" үтә. 18.00 сәғәттән һуң баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары үҙҙәре теләгән театрға һәм мәҙәниәт һарайына бара аласаҡ. Ҡаланың үҙәк майҙандарында үҙешмәкәр коллективтарҙың сығыш яһауы көтөлә. Дөйөм алғанда 20-гә яҡын майҙансыҡ эшләйәсәк, махсус автобустар ҙа йөрөйәсәк. Был сара "Музейҙар төнө", "Кино төнө", "Китапханалар төнө" кеүек акцияларҙың дауамы булып тора.

✔Өфө дәүләт авиация техник университетының һәм уның филиалдарының беренсе курсына бюджет нигеҙенә 2071 студент ҡабул ителгән, үткән йыл менән сағыштырғанда, был яҡынса 300 кешегә күберәк. Быйыл абитуриенттар араһында конкурс тотош юғары уҡыу йорто буйынса бер урынға 14,7 кеше тәшкил иткән. Абсолют рекорд "Менеджмент" йүнәлеше буйынса теркәлгән, унда бер урынға 1017 абитуриент дәғүә иткән. Уҡыу йортона ҡабул итеү буйынса максималь балл (275) информатика һәм робототехника факультетында теркәлгән.

✔15-16 августа Борай ауылында Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылына арналған "Йәйғор" республика балалар-үҫмерҙәр ижады конкурсы үтә. Фестивалдә төрлө сәнғәт жанрҙарында ғәҙәти булмаған ижади һәләттәргә һәм мөмкинлектәргә эйә булған 7-17 йәштәрҙәге башҡарыусылар һәм балалар ижади коллективтары ҡатнаша ("Дан минуты" тапшырыуы принцибы буйынса). Республиканың 38 районынан 800-гә яҡын ҡатнашыусы конкурстың тәүге һайлап алыу туры аша үткән. Гала-концерт 16 августа үтә.

ҠОЛАҠ ҺАЛ!

# ТИН ҺУМДЫ ҺАҠЛАЙ



**Гәзитебеҙҙең үткән һандарында коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙәр күләменең артыуы һәм улар граждандарҙың кесәһенә һуҡмаһын өсөн республика Хөкүмәтенең төрлө ярҙам саралары булдырыуы тураһында яҙғайныҡ инде. Әммә заман гелән, кемдер килеп ярҙам итер, беҙҙең өсөн кемдер эшләр, тигән ҡулланыусы фекере менән йәшәүселәргә ауыһыҙ. Бөгөн һәр нәмәне үҙең хәстәрләргә, үҙең экономияларға, үҙең нимәлер уйларға тейешһең. Мәҫәлән, әгәр фатирығыҙға һаман да иҫәп приборҙары ҡуймағанһығыҙ икән, бик ныҡ хаталанаһығыҙ. Сөнки тап ошо ҡорамалдар коммуналь хеҙмәттәрҙең хаҡын 10-30 процентҡа кәметергә мөмкинлек бирә лә инде. Шулай уҡ түбәндәге кәңәштәр ҙә иҫәпсел түгел, ә һаҡсыл булырға ярҙам итер.**

## Йылылыҡты нисек һаҡларға?

• Ишек, тәҙрә рамдарындағы ярыҡтарҙы монтаж күбеге, төрлө герметиктар һәм башҡа материалдар ярҙамында нығытырға мөмкин.

• Ишектәрҙең һәм тәҙрәләрҙең ябылып етмәгән ерҙәрен махсус материалдар ярҙамында тығыҙларға кәрәк.

• Мөмкинлек булғанда, ағас рамлы тәҙрәләрҙе күп камералы һәм елләтеү системаһы булған металлопластикка алмаштырыу зарур. Был сара өйөгөҙҙәге йылылыҡты ла, урамдағы шау-шыуҙан да һаҡлаясаҡ.

• Фатирға ингәндә ҡуйылған икенсе ишек тә йылыны ла сығармаҫ, шау-шыуҙан да һаҡлар.

• Оҙон тәҙрә ҡорғандары, радиаторлы экрандар, уңышһыҙ ултыртылған мебель, батарея алдына ҡуйылған кер киптереү ҡулайламаһы йылылыҡтың 20 процентын йотоуы мөмкин. Радиатор һәм стена араһына беркетелгән фольга бина эсендәге температураны бер градусҡа күтәрергә ярҙам итер.

• Балкон йәки лоджияға быяла тәҙрәләр ҡуйырға кәрәк.

## Электр энергияһын нисек экономияларға?

• Ғәҙәти лампаларҙы энергия һаҡлаусы лампалар менән алмаштырырға кәрәк.

• Телевизор, кондиционер, микротулҡынлы мейестәр һәм башҡа көтөү режимында, йәғни һүндерелеп тә, розетканан алынмаған приборҙар барыбер ҙә электр энергияһын ашай. Улар менән ҡулланғандан һуң, мотлаҡ розетканан һурығыҙ. Әйткәндәй, был ҡағиҙә кеҫә телефондарын заряҙлау ҡулайламаларына һәм башҡа ваҡ электроникаға ла ҡағыла.

• Һыуытҡыс, кер йыуыу машинаһы һәм башҡа электр көнкүреш әйберҙәрен һатып алғанда уларҙың экономиялылыҡ сифатына иғтибар итегеҙ. "A" һәм "B" юғары экономиялылыҡты, ә "E", "F", " G" энергияны күп ашауҙы аңлата.

• Һыуытҡыс һәм газ плитәһе - бер-береһен хуп күрмәүсе күршеләр! Плитәнән сыҡҡан йылылыҡ һәҙемтәһендә һыуытҡыс күберәк энергия "ашай".

• Электр ҡорамалдары һәм көнкүреш техникаһының торошон күҙәтеп торолоҙ. Ваҡытында профилактика үткәрегеҙ һәм ремонт эштәрен башҡарығыҙ. Уларҙы инструкцияға ярашлы ҡулланығыҙ һәм тәрбиәләгеҙ.

• Яҡтыртыуға сығымдарҙы ҡыҫҡартыу маҡсатында бинаны ремонтлағанда стеналарҙы яҡты төҫтәргә буяғыҙ һәм асыҡ ҡорғандар элегеҙ. Тәҙрәләрегеҙҙе йыш йыуығыҙ. Туҙанға батҡан тәҙрә бүлмәнең тәбиғи яҡтылығын 20-30 процентҡа түбәнәйтә, шуға ла утты йышыраҡ ҡабыҙырға тура килә.

• Электр счетчигының күрһәткестәрен аныҡ алып һәм яҙып барығыҙ, уларҙың артыуын йәки кәмеүен анализлағыҙ.

## Һыуҙы нисек экономиялы ҡулланырға?

• Һыуҙың иҫәбен алыусы иҫәп ҡулайламалары (счетчиктар) һәм һалмауырлы (рычажный) ҡушылдырғыс (смеситель) ҡуйығыҙ.

• Һыуҙы тулы ҡеүәтенә асмағыҙ.

• Кем һыуҙы экономияларға теләй, уларҙың девизы: ванна инергә түгел, ә душта ҡойонорға! Сөнки тулы ванна өсөн 140-160 литр һыу кәрәк, ә душта йыуынғанда был күләм ни бары 30-50 литр ғына талап ителә. Әгәр дүрт кешенән торған бер ғаиләлә аҙнаһына ике тапҡыр ванна инеү урынына душта йыуыналар икән, йылына 46 кубометр һыу экономиялана!

• Йыуҙырыу бағы ҡуйғанда, уның ике төймәләһен алығыҙ. Бактың эшләүен тикшерегеҙ, һыу ағып тороуға юл ҡуймағыҙ. Ғәҙәттәге йыуҙырыу бағы бер баҫҡанда 9 литр, экономиялыһы - алты, ә ике төймәләһе ни бары өс литр ғына һыу ағыҙа. Дүрт кешенән торған ғаилә ике төймәле йыуҙырыу бағы ҡуйып, йылына яҡынса 21 кубометр һыу экономиялай.

• Яңы көнкүреш әйберен һатып алғанда, уның энергияны ғына түгел, һыуҙы ла күпме файҙаланыуына иғтибар итегеҙ.

## Газды нисек экономияларға?

• Ашарға бешергәндә кәстрүлдең төбө газдың горелкаһының диаметрына тап килгәнен һайлағыҙ. Кәстрүлдең төбө деформацияланмаған булырға тейеш.

• Кәстрүл төбөн көйөктән таҙартығыҙ.

• Махсус газды экономиялаусы һауыт-һаба ҡулланығыҙ.

• Горелка аҫтына фольганан прокладка һалығыҙ. Был газды ғына экономиялап ҡалмаясаҡ, ә плитә өҫтөн бысраныуҙан да һаҡлаясаҡ.

• Духовка менән ҡулланғанда уның ишеге ныҡлы ябылыуына һәм йылы һауаның сығмауына инанығыҙ.

ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...

# ӨФӨ - ТАУ БАШЫНДА...

## Ә тауҙы һыу баҫмай



**Һуңғы көндәрҙә республикабыҙ райондарында һәм ҡалаларында туҡтауһыҙ ямғырҙар яуыуы ҙур ғына проблемалар тыуҙырып өлгөрҙө. Аллаға шөкөр, тибеҙ, һыу баҫыуҙар тау башында балҡып ултырған баш ҡалабыҙ Өфөгә әллә ниндәй ҡурҡыныс менән янамай тиерлек. Бының өсөн, беҙ, әлбиттә, иң беренсе нәүбәттә Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары ҡушылған ерҙәге ҡалҡыулыҡҡа Ҡаруҡыя, Башҡорт, Имәнҡала ҡалалары төҙөгән атай-олатайҙарыбыҙға бурыслыбыҙ. Үткән быуаттарҙа йылғалар менән уратып алынған тау башындағы ҡәлғә сит дошмандар һөжүменән һаҡланыр өсөн ҡулай булһа, бөгөн - һыу баҫмай.**

Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Көнсығыш хәлдәр буйынса милли үҙәге идаралығының һуңғы күрһәткестәре буйынса (улар үҙгәреп тора), республикабыҙҙың 8 ауыл-ҡалаһын һыу баҫҡан. Һыу баҫҡан бар урындарҙа ла электр энергияһы менән тәьмин итеү системаһы зыян күргән. Республикабыҙҙа барлығы 219 йорт һыу эсендә ҡалған, уларҙан 773 кеше, шул иҫәптән 264 бала алты махсус урынға ваҡытлыса урынлаштырылған.

Аҫҡар-Магнитогорск автомобиль юлында ун метр асфальтты һыу йыуған. Таштимер ауылында иһә, 500 метр оҙонлоғондағы асфальт юлды һыу ҡаплаған, был тирәлә автомобилдәр хәрәкәте ваҡытлыса туҡтатылған. Әгәр ҙә ямғыр туҡтамаһа, алдағы көндәрҙә Яҡтыгүл шифахананындағы Мауыҙҙы күленең дә полотноһы өҫтөнән һыу ағыуы бар. Ул осраҡта Разведка, Ташбулат ауылдары һыу аҫтында ҡалыуы бар.

Үткән аҙнала Үҙәк телеканалдар аша Магнитогорск ҡалаһы урамдарында ла автомобилдәрҙең йөҙөп йөрөүенә шаһит булғайныҡ. Республикабыҙҙың Белорет, Йәрмәкәй райондары ауылдарында ла һыу баҫыуҙар күҙәтелә. Ҡыҫҡаһы, әгәр ҙә ямғырҙар тултамаһа, һыу баҫыуҙан зыян күреүселәр хаҡындағы мәғлүмәт бер туҡтауһыҙ өҫтәлеп, үҙгәреп тороро көн кеүек асыҡ.

Өфөбөҙгә килгәндә, ниндәй генә көслө ямғырҙар яуып үтмәһен, асфальт өҫтөнә төшкән һыу үҙенең тәбиғи юҫығы буйынса тауҙан аҫтағы йылғаларға ағып төшөп, ҡалабыҙҙы һыу баҫыуҙарынан ҡотҡара. Шулай ҙа ҡайһы бер элегерәк планлаштырылған һәм яңысаһы менән алмаштырылмаған, һыу улағы ҡуйылмаған урам мөйөштәрендә ҡапыл ғына йыйылып киткән һыу бигерәк тә йәйәүлеләр өсөн мәшәҡәт тыуҙырыуын да танырға тура килә барыбер. Ә былай, дөйөм алғанда, Өфө - тигеҙ урында ултырған донъяның башҡа ҡалаларына ҡарағанда был йәһәттән күпкә уңайлыраҡ, халҡы күпкә бәхетлерәк.

Әмир ҒҮМӘРОВ.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Ҡолаҡ шаулаһа…

❖ Боронғо бер кәңәш: 1 балғалаҡ баланды иҙәһегеҙ ҙә, уға ярты балғалаҡ шыйыҡ бал өҫтәйһегеҙ. Марлянан яһалған тампондарҙы ошо ҡатнашмаға манып, төнгөләккә ҡолаҡтарға ҡуйһығыҙ. Дауаланыу курсы - ике аҙнанан кәм түгел, бер ай дауам итһәгеҙ, тағы ла яҡшыраҡ.

❖ 100 грамм һарымһаҡты ит турағыстан ике тапҡыр үткәрергә, 1 стакан араҡы, 50 грамм бал һәм 30 мл 20 процентлы прополис төнәтмәһе өҫтәргә. Болғатып, 10 көнгә ҡараңғы урынға ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан ярты сәғәт алда яртышар ҡалаҡ ҡабул итергә. Был сара ҡолаҡ шаулауынан ғына ҡотҡармай, хәтерҙе яҡшырта, баш әйләнеүе, баш ауыртыуҙың ҡайһы бер формалары үтә.

❖ Һуғанды аҡ әнис (тмин) орлоғо менән тултырып, духовкала бешерегеҙ. Һуңынан һутын һығып алығыҙ, уның һәр тамсыһы был сирҙән яҡшы дауа. Көнөнә 2 тапҡыр һәр ҡолаҡҡа 2-3 тамсы тамыҙырға. Ҡолаҡтар тоноуы үтеп, хәлегеҙ яҡшырғас та, дауалауҙы туктатмағыҙ. Был дауа яҡынса 4-5 көн дауам итә.

## Ҡолаҡ ишетмәй башлаһа

Боронғо имселәр иҫәпләүенсә, 1-2 ай дауамында көн һайын 1-2 тапҡыр лимон тышын сәйнәһәң, ишетеү һәләте яҡшыра. Һарымһаҡ та яҡшы дауалаусы - таҙартылған һарымһаҡ тешен ҡолаҡҡа һалығыҙ һәм әсетеү барлыҡҡа килгәнсе тотоғоҙ. Был процедураны көнөнә 1-2 тапҡыр, 1-2 ай дауамында ҡабатлағыҙ.

## Ҡолаҡ шаулағанда һәм гипертония ауырыуында

1 балғалаҡ ваҡланған омела үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойғас, 10 минут ҡайнатырға. Бер сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 2-3 тапҡыр ашаған ваҡытта 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Былай дауаланған ваҡытта туғай клеверы төнәтмәһе ҡабул итеү яҡшы: 1 ҡалаҡ сәскәгә 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, бер сәғәт төнәтергә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 15-20 минут алда 300 мл эсергә.

❖ Бер ус самаһы киптерелгән укропҡа 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, ашар алдынан ярты стакан эсергә. Даими рәүештә бер ай эсергә, хәлегеҙ яҡшырасаҡ.

Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.

✓ Ә балалар өсөн туған телле мөхит тыуҙырыу - ысын күңел ялы. Улар үҙҙәрен аса, атлауҙары, хәрәкәттәре үҙгәрә, фекерҙәрендә ҡырҡа боролош барлыҡҡа килә. Аҡҡошҡа - күл, былбылға тал кәрәк шул.



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

## БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Йөрәк ауырыуына бәйле им-том

Йөрәк ауыртһа, имсе ошо әпсенде әйтеп, йомшаҡ ҡына итеп йөрәкте һылай:

*Эй, йөрәк, ҡайт, йөрәк,*
*Ай ҡайтты, һин дә ҡайт,*
*Көн ҡайтты, һин дә ҡайт!*
*Ат башындай алтын йөрәк,*
*Ҡуй башындай көмөш йөрәк.*
*Урыныңды тап, урыныңды тап!*
*Имләмәһәм - миңә языҡ,*
*Им булмаһа - һиңә языҡ.*
*Минең ҡулым түгел.*
*Фәйшә, Фатима ҡулы.*

**Йөрәккә тауыҡ ултыртыу.** Был ысул кеше ҡурҡканда киң ҡулланыла. Ауырыуҙың күкрәгенә бәйләнгән һәм ҡанаттары йәйелгән тере тауыҡ (нирәк кенә әтәс) ултырталар. Уның күкрәк өлөшө ауырыу кешенең йөрәге янында булырға, ә башы күлдәк иҙеүе аша сығып торорға тейеш. Унан һуң ауырыуҙы һәм тауыҡты ҡаплайҙар (тауыҡ бер сәғәт самаһы ятырға тейеш). Шул рәүештә ауырыуҙың ҡурҡыуы тауыҡҡа күсә. Ултыртҡанда шундай доға уҡыйҙар:

*Әғүҙү бил-ләһи минәш-шәйтанир-ражим,*
*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,*
*Сәбәпсе мин булайым, Сихәт Алланан булһын!*

Кеше ныҡ ҡурҡһа, тауыҡ үлә икән. Үлгән тауыҡты кеше аяғы баҫмаған ергә алып барып ташлағандар. Әгәр тауыҡ үлмәһә, уны бәрәй кешегә хәйер итеп биргәндәр.

**Хәл бөтөп, йөрәк ауыртһа, им-том.** Йөрәк ауыртып, хәлһеҙлек булһа, алтын имергә кәрәк. Әүәле Миндәк, Табылғашты йылғаларында алтын йыуғандар. Йөрәге ауыртҡандар бет ҙурлығындағы алтынды имеп йөрөгән. Имер алдынан, әпсен дә әйткәндәр:

*Һарыны алам тәнемә! Һарыны алам ҡояштан,*
*һарыны алам сәскәнән, Һарыны алам алтындан.*
*Һары кәрәк көскә, бирмә аны төскә.*
*Бирмә, алтын, һин күҙгә, бирмә мине ҡартлыҡҡа!*
*Хәл имеүем һаулыҡҡа!*
*Тәңгә - йәм! Йәнгә - сәм! Амин!*

**Йөрәк тайыу.** Күктән ҡурҡып, йөрәк тайһа, тышҡа сығып, элек уҡтан атҡандар. Атҡанда ошо һамаҡ әйтелгән:

*Күк күкрәүек - көкре уҡ, һына һиңә тәҙ уҡ,*
*Сыбыртҡыны эймә, бала-әҙәмгә (исеме) теймә,*
*Бына һиңә һаҙаҡ, үүгәндә таҡ!*

Имсе уҡ ата ла ҡайҙа төшкәнен ҡарай, ти. Әгәр ергә ҡаҙалһа, шуның менән тамам.

**Йөрәк болғаныу.** Әгәр кешенең йөрәге болғанып, ашамай йәки ашай алмай торһа, уға әҙләп кенә йылан мөгөҙөн ҡайнатып эсергәндәр.

**Ҡурҡканға им.** Кеше ҡурҡып, ауырыуға һабышһа, күк күгәрсен һуйып, уға йөрәген ашатҡандар.

**Тәгәрмәс туғыны име.** Кешенең бик ныҡ ҡото осһа, арба тәгәрмәсенең туғынын эске яғынан һыҙырып алып, уны утҡа тотоп, тәүҙә йөрәк яғы яурын башына, унан уңына, шунан баш осонда һыулы һауытҡа һалғандар.

**Йөрәк ултыртыу.** Кеше ҡурҡһа, уның йөрәге күсә икән. Күскән йөрәкте һыйпап, һамаҡлап, урынына ултыртҡандар, һыйпағанда ошо әпсен дә әйтелгән:

*Әғүҙү бил-ләһи минәш-шәйтанир-ражим,*
*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,*
*Сәбәп минән булһын.*
*Шифа Алланан булһын.*
*Ҡара башлы ҡан йөрәк.*
*Елпенмә, талпынма,*
*Урыныңда ултырғыл!*
*Ҡара башлы ҡан йөрәк,*
*Урыныңа ултырғыл!*
*Ҡара башлы ҡан йөрәк,*
*Урыныңа ултырғыл!*
*Елпенмә, талпынма!*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

## Ун бишенсе һабаҡ: "Бала һәм мөхит"



**Ҡәҙерле туғандар, йәш атай-әсәйҙәр! "Тәнәйҙәргә тәғәйен тәрбиә" тип аталған был яҙмаларымды һабаҡ тип атағанға иғтибар иткәнһегеҙҙер. Был яҙмалар ысын-ысындан һабаҡ ул. Тормоштан алынған, һыналған, аҙаҡ ошо һынауҙарымды күҙәтеүҙәр аша тағы бер тапҡыр раҫлап, шунан һуң ғына һабаҡ тип атап, һеҙгә тәҡдим итәм. Бөгөнгө һүҙем бала һәм мөхит тураһында булыр.**

Халыҡта "Аҡҡош - күлдә, былбыл талда матур" тигән ҡанатлы фекер бар. Был фекерҙе бына инде ун алтынсы йыл эшләп килгән "Йәйләү" ял итеү үҙәге тураһындағы һүҙем менән ялғамаҡсымын. Ошо программаны тормошҡа ашырыу өсөн мөмкинлек биргән Мәғариф министрлығына сикһеҙ рәхмәтлемен. Сөнки бында атай-әсәйҙәрҙең тәрбиә эшендәге ыңғай яҡтары ла, кире яҡтары ла ус эсендәге кеүек күренә. Бала - атай-әсәй тәрбиәһенең сағылышы ул. Был ял итеү үҙәге үҙ мөхитенә ынтылып-талпынып торған балаларға яурындарын яҙып, күкрәктәрен киреп, ҡолас йәйеп, ҡанатланып йәшәп алырға мөмкинлек бирә. Бик аҙға ғына, егерме бер көнгә. Унан һуң тағы... сит илдәрҙә, сит мөхиттә йәшәгән һәм йыл һайын тыуған яғына ҡайтып әйләнергә, туған мөхиттә туған тел, туған моңға сарсауҙарын баҫып алырға тип, йыл буйы отпускыларын көтөп һарғайған милләттәштәребеҙ кеүек, күп кенә балалар үҙ Башҡортостанында, үҙ баш ҡалаһында башҡорт мөхитен һағынып, "Йәйләү"ҙе көтә башлай. Уларҙың ҡайһы берҙәре атай-әсәйҙәренең көҙҙән үк ғариза яҙып ҡуйыуҙарын талап итә, ҡайһы берҙәре көтөп кенә ҡалмай, олимпиадаларҙа, төрлө конкурстарҙа еңеү, беренселекте алыу өсөн тырыша-тынтыла башлай. Был шатлыҡлы хәл.

"Йәйләү"ҙең тәғәйен генә үҙ урыны юҡ. Йыл һайын ниндәйҙер лагерь биләмәһендә "өйәҙәш" булабыҙ йәки ваҡытлыса "фатир" биләп торабыҙ. Ун алты йыллыҡ (уның ун дүрт йылы Мәғариф министрлығы ҡанаты аҫтында) тәжрибә нимә күрһәтте? Ни өсөн мин был хаҡта "Тәнәйҙәргә тәғәйен тәрбиә" тигән мәҡәләлә яҙам? Сөнки йәш атай-әсәйҙәргә бала өсөн туған мөхиттең ни тиклем ҙур әһәмиәткә эйә булыуын, туған мөхитһеҙ баланың ҡамғаҡ кеүек тамырһыҙ, олонһоҙ үҫемлеккә әйләнеү ихтималлығын аңлатҡы килә.

Хөрмәтле атай-әсәйҙәр, зинһар, балағыҙҙы тыуған мөхиттән айырмағыҙ. Мотлаҡ "Йәйләү"ҙә ял иттерегеҙ, тип әйтмәйем, өйҙә, ғаиләлә булдырығыҙ туған мөхитте. Ни өсөн әйтәм был һүҙҙәрҙе?

"Йәйләү"ҙәге йыл да ҡабатланған тәжрибә. Ял үҙәгенә балаһын күрергә килгән атай-әсәйҙәр минең менән башҡортса һөйләшеп тора ла, шунда уҡ балаһына рус телендә һүҙ ҡуша. Бала ялт итеп миңә боролоп ҡарай, бер килке ни эшләргә белмәй тора. Сөнки "Йәйләү"ҙә төп талап - башҡортса һөйләшеү, ҡайтҡас та рус телле атай-әсәйҙәрегеҙ, олатай-өләсәйҙәрегеҙ менән башҡортса һөйләшегеҙ, туғандарың менән туған телдә аралашмау дорфалыҡ, наҙанлыҡ, үҙ телеңде, тимәк, милләтеңде башҡаларҙан кәм тойоу, тип аңлатабыҙ. Шуға ла бала аптыранып ҡала. Баланы ауыр хәлдә ҡалдырмау өсөн ситкә китәм. Әсәһе йәки өләсәһе (хәҙер рус телле өләсәйҙәр заманы башланды, уҙған быуаттың алтмышынсы йылдар сәйәсәте үҙ һөҙөмтәһен бирә) балаһы менән рәхәтләнеп рус телендә аралашып ала. Аҙаҡ атай-әсәйҙәрҙең үҙҙәре менән әңгәмә ҡорам.

- Мин бит рус мәктәбендә уҡыным, рус телле булып үҫтем. Бәләкәйҙән рус телендә аралаштым, - тип аҡлана күбеһе.

- Хәҙер инде ҡырҡ йәште үттең бит. Көн һайын бер генә башҡорт һүҙе өйрәнһәң дә балаң менән туған телдә аралашыу кимәленә өлгөшер инең. **Ана, Американан килгән инглиз телле кешеләр бер йылда бынамын тигән итеп башҡортса һөйләшеп алып китә. Ә һин туған телеңде өйрәнә алмайһың. Баланың ҡанына һалынған һәләт туған тел аша ғына асыла. Әҙер гилемдә ниндәй телдә булһа ла өйрәнеп, хатта профессор дәрәжәһенә күтәрелеп була. Ә бына ҡанға һалынған һәләт, ижад ҡомары фәҡәт туған тел, туған мөхит шарттарында ғына асыла. Балағыҙҙы, халҡыбыҙҙы әллә ниндәй асыштарҙан мәхрүм итеүегеҙ ихтимал. Балаң зирәк, ул үҫергә тейеш. Әгәр үҙең дә туған телле булһаң, был кимәлдә генә ҡалмаҫ инең, юғары белем генә һинең өсөн сик булмаҫ ине...**

Ошондай һөйләшеүҙәр ҙә булып ала. Файҙаһы булалырмы-юҡмы, әммә туған телен белмәгән, туған телендә йырламаған баланың күҙҙәрендә нур ҙа, осҡон да күрмәгәнгә йән әсенә. Ә бит ошо сәбәпле туған телле, донъя гилеменә үҙ халҡыбыҙ фәлсәфәһе аша ҡараған йәш ғалимдарыбыҙҙың юҡ кимәлендә булыуы халҡыбыҙҙың киләсәген хәүеф аҫтына ҡуя. Һәр бала - киләсәгебеҙ өлөшсәһе бит.

"Өйәҙәш" булғас, был йәйҙә күршелә генә рус телле лагерь урынлашҡайны. Унда ял итеүсе балалар менән күрешеп-аралашып йөрөлдө. Сәхнәлә "Йәйләү" сығыш яһай башлаһа, шул лагерҙағы башҡорт балалары ағас төптәренә баҫып, ҡарап-күҙәтеп тора, йырға ҡушыла, бейеү хәрәкәттәрен ҡабатлай, малайҙарыбыҙ янына килеп, ҡурай тотоп ҡарай, ҡумыҙ һорап торалар. Береһе хатта: "Апай, һеҙҙең "Йәйләү"гә нисек эләгеп була ул? Минең дә һеҙҙең менән булғым килә", - тине лә, руссалап: "Ни эшләп һин мине "Йәйләү"гә бирмәнең? Бында шул тиклем күңелле", - тип, әсәһенә шылтыратыла башланы. Бала үҙ мөхитенә тартыла.

Быйыл "Урал батыр" конкурсында ҡатнашып, беренселек яулаған, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡып, олимпиадаларҙа призлы урын алған татар телле уҡыусылар ҙа булды "Йәйләү"ҙә. Бөтөн сараларҙа ихлас ҡатнаштылар, тап-таҙа башҡорт телендә сығыш яһанылар, әммә үҙ-ара татар телендә аралаштылар һәм күрергә килгән атай-әсәйҙәре менән дә туған телдәрендә һөйләштеләр. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ һәйбәт үҙләштереүҙәре менән дә, үҙ туған телдәрендә аралашыуҙары менән дә был балалар мине һоҡландырҙы. Шул уҡ ваҡытта ҡасандыр мине туған телемдә һөйләшергә өйрәтмәгәндәр, тип, атай-әсәйҙәренә үпкәләгән утыҙ-ҡырҡ йәшлек атай-әсәйҙәр, алтмыш-етмеш йәшлек олатай-өләсәйҙәр йәлләү тойғоһо ҡалдыра...

Ә балалар өсөн туған телле мөхит тыуҙырыу - ысын күңел ялы. Улар үҙҙәрен аса, атлауҙары, хәрәкәттәре үҙгәрә, фекерҙәрендә ҡырҡа боролош барлыҡҡа килә. Аҡҡошҡа - күл, былбылға тал кәрәк шул.

Ҡәҙерле атай-әсәйҙәр, балаларығыҙҙың ысын һәләтен, ижад ҡомарын асыу, маҡсатлы йәшәтеү, юлдан тайпылдырмау, үҙтәрбиә теләгән булдырыу өсөн иң ышаныслы тәрбиәсе - туған тел, туған моң, туған мөхит, туған халҡы ҡосағында булыу икәнлеген онотмағыҙ ине. Был - ҡоро һүҙҙәр йыйылмаһы түгел, был фекерем - тиҫтәләрсә йылдар буйы туплана, күҙәтелә килгән тормош һабаҡтары ул.

Атай-әсәйҙәр, балағыҙҙы бөйөк иткегеҙ килһә, тәбиғәт ҡанунынан тайпылмағыҙ. Туған тел аралашыу өсөн генә түгел, фекерләү өсөн бирелә. Донъя кимәлендәге бөйөк асыштар, классик әҫәрҙәр, нигеҙҙә, туған телдә фекерләүселәр тарафынан тыуҙырылған. Ә инде зиһенеңдә бөйөк фекер тыуһын - уны аҡ ҡағыҙға ниндәй телдә булһа ла төшөрөп була.

Ошо урында бер ваҡиғаны өҫтәп китеү урынлы булыр. Оло Тәләк фажиғәһен үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайтҡан бер егет шул тиклем тетрәнә, эске тойғоларын шиғыр-йыр аша әйтеп биргеһе килә. Уның төнө буйы йоҡламай, булмә буйлап йөрөгәнен ишетеп, әсәһе уянып китә.

- Улым, нимә булды?

- Әсәй, күңелем тулы моң, йөрәгем тулы әрнеү-йәлләү, янам, тойғоларымды йыр аша әйткем килә. Әсәй, фекер тыуа, әйтеп бирә алмайым! Фекерҙәрем башҡортса бит минең, телем осона килә лә юғала. Ни эшләп башҡортса уҡытманың һин мине?

- Улым, өйҙә башҡортса аралашабыҙ ҙа инде, туған телеңде беләһең дә инде...

- Ул бит икмәк-тоҙлоҡ ҡына. Ә бына ошонда урғылған тойғоларымды әйтерлек һүҙҙәр етмәй. Телемдең яртыһы юҡ һымаҡ, ҡырҡып алынған кеүек. Ижад итерлек туған телем юҡ шул, әсәй...

Аңлағанға ишара ла етә, аңламағанға ҡырҡ йыл ҡарҡылдап торһаң да булмай, ти торғайны әсәйем. Һабаҡтарым аңлағандар һәм аңларға ынтылып тороусылар өсөн.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# "БОРОН БЫНДА БӨЙӨК ҠАЛА ТОРҒАН..."



**Баш ҡалабыҙ Өфөнөң боронғо тарихы буйынса ҡыҙыҡлы мәғлүмәт ҡалдырған тарихсыларҙың береһе ул "Топография Оренбургской губернии" исемле хеҙмәт авторы Петр Иванович Рычков. Ул үҙенең китабында Өфө төҙөлгәнгә тиклем уның урынында торған боронғо ҡала тураһында бәйән итә. Бына уның яҙғандары:**

"Ышаныслы сығанаҡтарҙан күренеүенсә, башҡорттар яһаҡты алыҫ йөрөтмәҫ өсөн һәм яу килгәндә һаҡланыу урыны булдырыу маҡсатында үҙ ерҙәрендә ҡала һалдырыу ниәте менән 1573 йылда батша Иван Васильевичҡа мөрәжәғәт иткән. Ҡала бейек тауҙарға уралған Ағиҙелдең уң яҡ ярында, тәрән һигеҙ йырын араһында һалынған. Шул йырындарҙың береһенән Саталҡы йылғаһы ағып ята. Өфөнөң исемен бындағы боронғо ҡаланан алғандар, тип фекер йөрөтөргә була. Ни өсөн тигәндә, нуғай хандары йәшәгән осорҙа уҡ бындағы ҡала Өфө тип аталыр булған. Икенсе яҡтан, Ағиҙел ярында төҙөлгән ҡалаға Өфө (Ҡариҙел) йылғаһының исемен алып ҡушҡандар тиеү мәғәнәһеҙ. Өфө йылғаһы Ағиҙелгә ҡаланан өс саҡырым өҫтәрәк ҡоя. Йылға исеме менән атарға теләһәләр, Өфөнән ике тапҡырға киңерәк булған Ағиҙелдең исемен алырҙар ине. Бынан тыш, ҡаланан биш саҡырым тирәһе алыҫтараҡ Өфө йылғаһы буйында, бейек урында боронғо ҡаласыҡ урыны хәҙер ҙә күренеп ята. Бында нуғай хандары йәшәгән, тип һөйләйҙәр. Ҡаласыҡ Өфө йылғаһы буйында урынлашҡанға күрә, Өфө тип аталған, күрәһең. Шунан күреп, Рәсәй төҙөгән ҡалаға ла Өфө атамаһы биргәндәр.

Нуғай даруғаһы Ҡаратабын улысынан абруйлы башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев аңлатыуынса, Ҡаҙан ханлығы ҡолатылып, башҡорттар Рәсәй тәхетенә ингәнгә тиклемге борон замандарҙа уҡ әлеге Өфө урынында бөйөк ҡала булған. Ул ҡала Ағиҙелдән Ҡариҙел йылғаһы тамағына тиклем, унан ары Ҡариҙел буйындағы Өфө тауҙарына тиклем йәйрәп ятҡан. Тимәк, ҡаланың киңлеге ун саҡырым тирәһе булған. Урыҫтар килгәнгә тиклем ҡалала Түрә Бабату Ҡылысов исемле нуғай ханы йәшәгән. Ул бында ҡыш көндәре генә торған. Йәйен ҡаланан илле саҡырым алыҫлыҡта, Дим йылғаһы буйында йәйләгән. Хан ике урында - Аҡзыярат күле янында һәм Слаҡ йылғаһы эргәһендә йәйләр булған. Аҡзыярат күле янында Түрәхандың күп кенә йорттары торған. Хәҙер ҙә күл янында мәсет бар, ә Слаҡ буйында таш йорттар һәм мәсеттең емереклектәре күренә. Түрәхандың ҡул аҫтында булған нуғайҙар менән мең башҡорттарының 12 улысы һыҫар тиреһе, бал менән яһаҡ түләгән.

Әлеге Өфө торған урын борон Торатау тип йөрөтөлгән. Бында ҙур йылан килеп, ҡала халҡын үҙенең ағыуы менән һәләк итә башлағас, хан үҙенең нуғайҙары менән Дим буйына күсенә. Бер аҙ йәшәгәндән һуң, урыҫтарҙың Ҡасим ҡалаһын баҫып алыуы, артабан Ҡаҙанға яу менән килергә йыйыныуын ишетеп, ҡурҡып, Кубань тарафтарына киткән. Ә инде теге ағыу сәскән йылан, имеш, Ҡариҙел йылғаһы янындағы тауға инеп олаҡҡан. Артабан бер кемгә лә зыян итмәгән..."

**Азат ЯРМУЛЛИН әҙерләне.**

**Белешмә:**

**РЫЧКОВ Петр Иванович (1712 - 1777) - иҡтисадсы, тарихсы, географ, натуралист, Санкт-Петербург Фәндәр академияһының беренсе мөхбир-ағзаһы, коллегия советнигы. Башҡортостанға 1734 йылда, Ырымбур экспедицияһы бухгалтеры булараҡ килгән. Алтмышҡа яҡын ғилми хеҙмәт, шул иҫәптән "Ырымбур губернаһы топографияһы", Башҡортостан тарихы буйынса мөһим ғилми эштәр авторы ул төбәктең файҙалы ҡаҙылма байлыҡтарын, хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһын, башҡорттарҙың хужалығы һәм көнкүрешен тасуирлап яҙған. Башҡортостандың Урыҫ дәүләтенә ҡушылыуы, төбәкте колониялаштырыу, XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт яуҙары тарихын, башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләләрен өйрәнгән.**

Ағиҙелдең һул ярынан Өфө күренеше, Петр Рычков эшләгән һүрәт (1744 йыл).



БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ЧЕХОВТЫҢ БАШҠОРТОСТАНДА БУЛҒАНЫ

Лев Толстой Башҡортостан далаларына барып, ҡымыҙ менән дауаланырға кәңәш иткәс, Антон Чехов күп уйлап тормай Андреевка шифаханаһына юл тота. Ә үҙенең нәшриәтсеһе А. Ф. Марксҡа: "Ике ай дауамында минең адресым түбәндәгесә буласаҡ: Һамар-Златоуст тимер юлы, Аксенов станцияһы, Андреевка шифаханаһы",- тип хәбәр итә. Антон Павлович һәм Ольга Леонардовна Книппер бында, никахлашҡандан һуң, 1901 йылдың 25 майында килә. Ольга Книппер-Чехова аҙаҡ былай тип хәтерләйәсәк: "Аксеновта Антон Павловичҡа тәбиғәт бик оҡшай ине. Шифахана бик матур имән урманы араһында ултыра, ләкин йәшәү шарттары бер аҙ ҡыйынлыҡтар тыуҙырҙы... Беҙ Антон Павлович менән ике бүлмәле бәләкәй генә өйҙә йәшәнек. Һәр береһендә берәр карауат менән берәр ултырғыс бар ине. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: бында түшәк кәрәк-яраҡтары, мендәрҙәр булмай сыҡты, шуға күрә миңә килгән көндөң иртәгәһенә үк Өфөгә барып, бөтә кәрәк-яраҡтар һатып алырға тура килде. Ләкин ябай шифахананың көнкүреш уңайһыҙлыҡтары иҫ киткес тәбиғәт, саф һауа менән аҡлана".

Бында йәшәгәндә Чехов яҙыусылар, нәшриәтселәр, туғандары һәм яҡындары менән хат алыша. Антон Павлович үҙенең ятҡан урыны - ҡалҡыулыҡта торған өҫтәл артында эшләр булған: китап уҡыған, почта ҡараштырған, хаттар яҙған. Тап ошонда ул "Нива" нәшриәт йортонда сыҡҡан тулы әҫәрҙәр йыйынтығының бишенсе томының икенсе киҫәген тикшереп ебәрә.

1901 йылдың 1 июлендә Чехов ғаиләһе шифахананан ҡайтып китә. Бары тик бер ай ғына йәшәһә лә, бөйөк яҙыусы Башҡортостандан нығынып, төҙәлеп ҡайта. Иң яҡшы сит ил курорттары бирмәгән шифаны ҡымыҙ һәм башҡорт тәбиғәте бирә.

Өфө губернаһынан Антон Павлович Ялтаға ҡайта, бында ул үҙен тағы ла насар тоя башлай. "Мин Аксеновта үҙемде ярайһы түҙерлек тоя инем, ә бында, Ялтала, йүткерә башланым..." - тип яҙа ул Горькийға.

Әлшәй районында Чехов йөрөгән иҫтәлекле урындар, Антон Павлович һәм Ольга Леонардовна йәшәгән өй һаҡланған. Уның эргәһендә Чеховтың бюсы ҡуйылған. Яҙыусы йөрөгән ауылдарҙа ла уның исеме һаҡланған.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

## БАШҠОРТТАР

### Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Бойҙай арышҡа ҡарағанда күберәк күләмдә сәселгән. Шулай ҙа Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында һәм ҡайһы бер Урал алды ҡалҡыулыҡтарында ул бөтөнләй сәселмәгән. Бойҙайҙы, урынына ҡарап, май дауамында сәскәндәр һәм ул августа өлгөргән. Арпа бөтөн ерҙә лә, әммә аҙ күләмдә сәселгән. Уны бойҙайҙан алда ултыртып, башҡа культураларҙан алдараҡ йыйып алғандар. Һолоно ла аҙ сәскәндәр һәм ерҙе насар эшкәртеү һөҙөмтәһендә уның уңышы ла күп булмаған. Ҡуҙаҡлыларҙы һәм ҡарабойҙайҙы башҡорттар, һирәк кенә ташламаларҙы иҫәпкә алмағанда, бик сәсеп бармағандар. Киндерҙе баҡсасылыҡ менән шөғөлләнгән урындарҙа ҙур булмаған күләмдә сәскәндәр. Йорт эргәһендәге участкаларҙа бик йыш ҡырағай киндер ҙә үҫкән.

Барлыҡ ярауайҙарға ла баҫыуҙар бер төрлө әҙерләнгән. Яҙғыһын ер күпселек осраҡта уның яңымы, иҫкеме булыуына, даими эшкәртелеү йәки эшкәртелмәүенә ҡарамаҫтан, бер тапҡыр ғына һөрөлгән. Тәрән итеп һөрөлмәгән, насар йомшартылған, сүп үләндәренән таҙартылмаған. Ундырышлы ерҙәр ҙур уңыш биргән, әммә бик йыш уларҙы сүп үләндәре баҫып китеү сәбәпле, уңыш нык кәмегән.

Ялан ерҙәрендә, нигеҙҙә, Башҡортостандың Урал аръяғында, ярауайҙар өсөн сәсеүлектәр бик йыш көҙгөһөн әҙерләнгән, ә яҙғыһын ҡабаттан һөрөлгән йәки тырматып сыҡҡандан һуң сәселгән. Бындай ысул менән әҙерләнгән ерҙә бойҙай сәскәндәр; икенсе йылына ҡамыл бер тапҡыр һөрөлгән һәм был урынға һоло ултыртҡандар; өсөнсө йылына ер парға ҡалдырылған. Ужым игене сәсер алдынан ерҙе ике тапҡыр һөргәндәр: беренсе тапҡыр июндә йәки июль башында (парға), ә икенсе тапҡыр сәсеү алдынан бер аҙна элек; сәсеү ерҙе тырматҡандан һуң башҡарылған һәм шуның менән парға ҡалдырылған ерҙә эш тамамланған. Ярауайҙарҙы сәсеү Башҡортостандың төрлө төбәгендә төрлөсә, төрлө ваҡытта башҡарылған. Төньяҡта ул көньяҡҡа ҡарағанда өс аҙнаға, ҡайһы берҙә бер айға һуңлаған.

Һирәк кенә ҡулланылған һәм бары тик урмандан тулыһынса таҙартылмаған ерҙәрҙе һөрөү өсөн иң ябай ҡорал булып һуҡа торған. Һирәк кенә төрлө ерҙә башҡорттар ике төрәнле һуҡа менән һөргән. Ул, нигеҙҙә, баҫыуҙы беренсе тапҡыр ужым ултыртыр өсөн парға һәм баҡса һөргәндә файҙаланылған.

Крайҙа ағас һабан киң таралған. XIX быуат һуңына һабан бөтөнләй ҡулланылыштан сыҡҡан. XX быуат башында һәр ауылда был эш ҡоралының бер-ике данаһын күрергә мөмкин ине әле. Был ҡорал менән ер һөргәндә ике кеше эшләгән. Уларҙың береһе аттарға йүнәлеш биреп барған, икенсеһе һабанды тотҡан. Был эш ҡоралы ике ағас өлөштән торған: һабан башынан һәм уҡтауҙан. Уның бер башы элмәк һәм ағас сөй ярҙамында ике тәгәрмәсле арбаға, икенсеһе саттың терәгенә нығытылған. Саттың алдына тимер төрән кейҙерелгән, ә үрге осона тотҡос ҡуйылған. Һабансы шуның ярҙамында һабан менән идара иткән. Уҡтау сат менән тимер шөрөп ярҙамында нығытылған. Ошо шөрөп - уҡ ярҙамында төрәндең төрәнлеге көйләнгән. Кәҫ таҡта булып ғәҙәттә ябай таҡта хеҙмәт иткән. Ул уң яҡтан ҡыялатып ҡағылған.

***✓ Яҙыу, һыҙыу, эшләү өсөн уң ҡулын күберәк файҙаланған баланың мейеһенең һул яҡ ярымшары эшләй, ә уң яғы асылда эшһеҙ ҡала, йәғни эшкә йәлеп ителмәй. Ошо уң яҡ ярымшар ижади һәләттәр өсөн яуап бирә.***



**Ошо көндәрҙә даими авторыбыҙ Самат Мөхәмәтйәнов һәм уның улы Ғайсар Бөтә Рәсәй иң яҡшы ғилми китап конкурсында еңеү яулап, лауреат булды. Ватан мәғарифын үҫтереү фонды тарафынан 11-се тапҡыр уҙғарылған сарала 1267 юғары уҡыу йортонан, ғилми-тикшеренеү учреждениеһынан биш мең ғалимдың эше араһынан дүрт кенә номинацияла иң яҡшылар билдәләнеп, улар араһында милләттәштәребеҙҙең дә булыуы - ҙур ҡыуаныс. Юғары баһаланған "Мейенең төҙөлөшө һәм текст өҫтөндә эшләү алымдары" тигән тикшеренеү һөҙөмтәләре менән ентеклерәк танышыу өсөн Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВтың үҙенә мөрәжәғәт иттек. Һүҙ - авторға.**

# Киләсәк өсөн... һул ҡул яуаплы!



## Яҙмыштарҙы... мәктәп хәл итә

Бик йыш, яҙмышына үҙең хужа, тип ҡабатларға яратһаҡ та, хәҙерге мәлдә кешенең яҙмышын, нигеҙҙә, ғаилә лә, шәхес тә түгел, ә тап мәктәп хәл итә. Йәғни унда уҡытыуҙың йөкмәткеһе йылдан-йыл ҡатмарлаша бара, ә кеше мейеһе менәр йылдар нисек булған, шул көйө ҡала: мәғлүмәт арта, ә мейенең мөмкинлектәре үҙгәрмәй. Мейе кешенең дөйөм тән ауырлығының 5 процентын ғына тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта бөтөн энергияның биштән бер өлөшөн исрафлап тора. Ошо бәләкәй генә ағзаның дүрт өлөшө бар - ҡабығы, ҡабыҡ аҫты, арҡа мейеһе менән тоташҡан урындағы инстинкт мейеһе, бәләкәй мейе (мозжечок). Бөгөнгө белем биреү системаһына ярашлы, беҙ бары тик мейенең ҡабығын ғына үҫтерәбеҙ, ә беҙгә уның барлыҡ өлөштәрен дә үҫтереү зарур. Ер шары буйынса алып ҡарағанда, Ҡытай, Япония һәм Сингапурҙа ғына мейенең дүрт өлөшөн дә үҫтерергә тырышалар. Бынын айырым күнекмәләре бар.

Әлеге ваҡытта бөтөн ерҙә яңыса уҡытыуға күсеү ысулдары эҙләнә. Сөнки күреп торабыҙ: уҡытыу кимәле йылап түбәнәйә. Вуз уҡытыусыһы булараҡ та әйтәм: быны беренсе курс студенттарының әҙерлек кимәле лә раҫлай. Бөгөнгө мәғариф системаһының төп проблемаһы шунда: бала дәреслектә бирелгән материалды ата-әсәһе ярҙамынан тыш аңлай алмай икән, ул дәреслектәрҙең баһаһы бик түбән. Ахырҙа шундай дәреслектәргә күберәк иғтибар бүлеү ихтыяжын тыуҙырып, мәктәптәрҙә, был беҙҙең илдә бигерәк тә нык күҙәтелә, файҙаһыҙыраҡ күренгән фәндәрҙе: йыр, рәсем, хеҙмәткә өйрәтеү дәрестәрен ҡыҫырыҡлайҙар, йәғни ҡыҫҡарталар. Һөҙөмтәлә яҙыу, һыҙыу, эшләү өсөн уң ҡулын күберәк файҙаланған баланың мейеһенең һул яҡ ярымшары эшләй, ә уң яғы асылда эшһеҙ ҡала, йәғни эшкә йәлеп ителмәй. Әммә тап ошо уң яҡ ярымшар шиғыр, нәфис текст яҙыу, ритм, рифма, музыка һәм картиналарҙы үҙләштереү, дөйөмләштереп әйткәндә - ижади һәләттәр, шулай уҡ күҙаллауҙар, хыялдар, ыңғай тойғолар өсөн яуап бирә. Шул күҙлектән сығып ҡарағанда, мейенең уң яҡ ярымшары эшмәкәрлеген үҫтерәбеҙ, тибеҙ икән, уға тыштан тәьҫир итеүсе көс кәрәк, һәм ул тап һул ҡул аша бирелә. Шуның өсөн дә беҙ ошо китабыбыҙҙа текст өҫтөндә эшләгәндә, йәғни тексты һул ҡул менән яҙғанда, ниндәй һөҙөмтәләргә өлгәшергә мөмкин икәнлеген күрһәтеп бирәбеҙ һәм уның ысулдары менән таныштырабыҙ. Икенсе яҡтан, һул ҡул менән яҙыу мейенең эшмәкәрлегенә генә түгел, кешенең шәхес булараҡ үҫешеүенә лә ҙур йоғонто яһай. Ошо йүнәлештәге даими һәм ныҡышмал эшмәкәрлек шәхестең холоҡ-фиғелен дә үҙгәртә, әлегә тиклем "уяна" алмай ятҡан һәләттәрҙе лә уятып ебәрә.

2000 йылдан алып мин ошо алымды ҡулланам. Мәктәп уҡыусылары булһа, беренсе класта һул ҡул менән яҙҙырмайым, икенсе кластан башлайым. Ә инде вуз студенттары менән эшләгәндә уларҙы икенсе курстан барыһын да һул ҡул менән яҙырға өйрәтәм. Тырыштары 48 битлек дәфтәр тулғансы яҙалар. Был нимә бирә? Әгәр ҙә беҙ һул ҡулды эшкә ҡушһаҡ, уң ҡулыбыҙ һәм һул ярымшар ял итә. Һөҙөмтәлә кеше эшләп тә ултыра, шул уҡ ваҡытта ял да итә. Был ялдың көсө нимәлә? Ул ҡәҙимгесә бер нәмә лә эшләмәй ял итеп ултырғанға йәки мәктәптәрҙәге, "мы писали, мы писали", тигән күнегеү эшләүгә ҡарағанда биш тапҡырға һөҙөмтәлерәк, көслөрәк. Тимәк, мин һул ҡул менән ике минут яҙһам, 10 минутлыҡ ял алам. Әгәр ҙә инде 10 минут яҙһам - бер сәғәтлек. Был ысулды үҙемдә 1985 йылдан башлап һынайым. 2001 йылда шиғыр яҙыу һәләтем асылды. Шул мәлдә бер проза әҫәре, шиғырҙар яҙҙым. Үҙемдә һынап ҡарағандан, тәжрибә үткәргәндән һуң, әгәр ҙә кеше икенсе төрләрәк йәшәргә, фекер йөрөтөргә теләһә, һул ҡул менән яҙырға тейеш, тигән һығымтаға килдем.

## Берҙәмлеккә килеү ысулы

Яҙған ваҡытта нимәгә иғтибар итергә кәрәк? Яҙырға тотонор алдынан уң ҡул һул ҡулға рөхсәт бирмәй. Уны кире дүңдерергә тырыша. Был мейенең һул яҡ ярымшарының ҡотҡоһо. Беренсе сиратта, ручканы һул ҡулға алған ваҡытта, һул яҡ ярымшар уға әмер бирә - ручканы алыҫыраҡ тот, һәм уны текә тот, ти. Шул ваҡытта ручканы уң ҡулға күсереп, уның нисек тотҡанын тикшереп ҡарап, ҡабат һул ҡулға алып яҙа башларға тейешһең. Яҙған ваҡытта ниндәйҙер бер эске көлкө барлыҡҡа килә. Ҡайһы берәүҙәр ҡысҡырып көлә. Мәҫәлән, бер төркөмдә 25 студент уҡый, икән ти. Шуларҙың икәүһе-өсәүһе ғәҙәти булмағанса көлә башлай. Ә был баяғы алымдың файҙаһы булыуының асыҡ дәлиле. Сөнки ярымшарҙар араһында бәйләнеш башлана: һул яҡ ярымшарҙан уң яҡҡа нимәлер аға башлай. Беҙ уны белмәйбеҙ, уны яҡшылап тикшергән кешеләр ҙә юҡ. Рәсәйҙә был теманы әлегә бер үҙем өйрәнәм, һәм бындай алым ҡулланыу Туймазы ҡалаһында нык таралды. Унда ике мәртәбә булып, был алым тураһында уҡытыусыларға аңлатҡайным. Уларҙың уҡыусылары барыһы ла 3-4-се синыфтарҙа һул ҡул менән яҙа.

Был ни өсөн файҙалы? Беренсенән, иң ауыр дәрестәрҙә, мәҫәлән, математиканың төп ҡағиҙәләрен, һул ҡул менән яҙаһың. Мәңгегә иҫләп ҡаларға теләйһең икән, атлап та ҡарайһың. Атлаған ваҡытта ҡәҙимгесә атламайһың, ә күберәк көсөргәнеште һул аяҡҡа төшөрәһең. Был да мейенең уң яҡ ярымшарын "уянырға" мәжбүр итә. Иң мөһиме - ауыр тойолған ҡағиҙәләр ҙә хәтерҙә мәңгегә тороп ҡала. Тағы шуныһы ҡыҙыҡ: уң ҡул менән яҙған кеше төрләсә яҙа, һул ҡул менән яҙғанда хәрефтәр уңға ла ятмай, һулға ла ятмай, һәр ваҡыт текә - тура тора. Быны ошо яҙманың кешелекте бер-береһен аңлауға, берҙәмлеккә килтереүен мин шунда күрәм.

## Береһе - бушай, икенсеһе - тулылана

Беҙ теләйбеҙме, теләмәйбеҙме, әммә мейе эшмәкәрлеге һәр ваҡыт ҡайнап тора. Унда төрлө мәғлүмәт йыйыла: тегеһен хәл итергә, был мәсьәләнең осона сығырға кәрәк. Был - һул яҡ ярымшарҙың эше. Һул ҡул менән яҙған арала, ул ошо эшмәкәрлекте, йәғни әһәмиәте булмаған ҡый-һайҙы, сүп-сарҙы ике ярымшар араһындағы бәләкәй генә тоташтырыусы "күпер" (мозолистое тело) аша уң яҡ ярымшарға күсерә. Һөҙөмтәлә мейенең уң яҡ ярымшары тулылана, һул яғы бушабыраҡ ҡала. Әгәр кеше ошо тәжрибәне - көн һайын 15 минут һул ҡул менән яҙыуҙы 111 көн даими ҡабатлаһа, ул бөтөнләй икенсе кешегә әйләнә. Ул үҙенең холҡон үҙгәртә ала, насар ғәҙәттәрен, мәҫәлән, тәмәке тартыу, спиртлы эсемлектәр эсеү, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙа йыш осраған буш хәбәр һөйләү, бер туктауһыҙ сәй эсеүҙе ташлай. Ғаиләһендә балалары, ире менән килешмәй йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙар бар. Улар һул ҡул менән яҙа башланы икән, тойғоларҙың нескәлегенә төшөнә башлай. Сөнки хис-тойғолар өсөн һул яҡ ярымшар яуап бирә. Һөҙөмтәлә ғаиләлә үҙ-ара аңлашыусанлыҡ та күпкә нығыраҡ була. Ғаиләнең башҡа ағзалары үҙен үҙгәртә алмағанда ла, ҡатын-ҡыҙ үҙен үҙгәртеүе арҡаһында башҡаларҙы ла үҙгәртә аласағын аңлай.

Алда әйтеп китеүемсә, ижади һәләтебеҙҙе арттырырға теләһәк, һул ҡул менән эшләргә кәрәк. Мәҫәлән, ер ҡаҙаһығыҙ икән, ти. Ғәҙәттә, был эште беҙ гел генә бер торошта башҡарабыҙ. Ә хәҙер мейене ял иттереү, эшләгән ваҡытта арымаҫ өсөн торошто үҙгәртергә кәрәк. Әйтәйек, ер ҡаҙығанда көрәккә гел генә уң аяҡ менән баҫаһың икән, торошто алмаштырғас, һул аяҡ менән баҫаһың һәм көрәктең һабын икенселәй тотаһың. Ифрат файҙалы күнегеүҙәрҙең береһе был. Быны ошоларҙың барыһын да бергә алып ҡарағанда, был уҡытыуҙы яңыса ҡорорға мөмкинлек бирә. Яңыса ҡороу нисек ул? Бала ҡыуанып уҡырға тейеш. Әгәр беҙ уны гел генә тикшереү эштәре менән ҡурҡытып торһаҡ, ул мәктәпте яратмай башлай. Мәктәпте яратмағас, уҡытыусыны ла яратмай. Уҡытыусыны яратмағас, ата-әсәләрҙе яратмай, һөҙөмтәлә үҙенең тормошон яратмай башлай. Хәҙерге мәлдә ни өсөн кеше эскелеккә бирелә, бигерәк тә наркотиктарға ылыға? Сөнки ул кеше мейеһенең һул яҡ ярымшары

***Әгәр кеше көн һайын 15 минут һул ҡул менән яҙыуҙы 111 көн даими ҡабатлаһа, ул бөтөнләй икенсе кешегә әйләнә. Ул үҙенең холҡон үҙгәртә ала, насар ғәҙәттәрен, мәҫәлән, тәмәке тартыу, спиртлы эсемлектәр эсеү, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙа йыш осраған буш хәбәр һөйләү, бер туктауһыҙ сәй эсеүҙе ташлай. Ғаиләһендә балалары, ире менән килешмәй йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙар бар. Улар һул ҡул менән яҙа башланы икән, тойғоларҙың нескәлегенә төшөнә башлай. Сөнки хис-тойғолар өсөн һул яҡ ярымшар яуап бирә.***

бик насар хәлдә, ул шунан ҡотолоу юлдарын эҙләй.

Кешелекте һәләкәтенә килтергән тағы бер сәбәп - ул компьютер. Һин унда хәрефтең "түмен" татымайһың, уның мәғлүмәтен тоймайһың, төймәләргә баҫып тик ултыраһың. Ул кешене тойғоһоҙ йән эйәһенә әйләндерә. Шуның өсөн дә кем ысын күңелдән уҡырға, бигерәк тә ғалим, фәлсәфәсе булырға теләй, уларға кәм тигәндә 30 йәшкә тиклем компьютер менән файҙаланырға кәңәш итмәйем. Бик кәрәк икән, башта ҡулдан яҙығыҙ, һуңынан компьютерҙа баҫтырыңыҙ. Ә бына һул ҡул менән яҙыуҙы үҙләштереү мотлаҡ кәрәк.

### Донъяны үҙгәртә алмаһаң... үҙең үҙгәр

Хәҙер һул ҡул менән яҙған балалар күпләп тыуа, һул ҡул менән эшләргә өйрәнгәндәр йылдан-йыл арта. Мәҫәлән, бынан ике мең йыл элек улар 6 процент ҡына булһа, хәҙер 13 процент. Быны раҫлаусы бороңғо яҙма һаҡланып ҡалған. Бер хәрби етәксе үҙенең ғәскәрендә кем һул ҡулы менән һуғыша алғанын тикшереп ҡараған. Улар алты процент ҡына тәшкил иткән. Сөнки һул ҡул менән көрәшкәндәргә уң ҡул менән генә эш итеүселәр ҡаршы тора алмаған. Шул алты проценттан айырым отряд төҙөлгән. Һәм был уң ҡул менән ҡорал тотоусыларҙың алымдарын яҡшы белгәс, ғәскәр уларҙы еңел ҡыйратҡан.

Ҡайһы бер илдәрҙә был күрһәткес 13 проценттан да артып китә. Ни өсөн тигәндә, был мәҙәниәттән дә тора. Мәҫәлән, ғәрәптәр ундан һулға яҙа. Уларҙың мейе эшмәкәрлеге бөтөнләй икенсе төрлө. Япон-ҡытайҙар өҫтән-аҫҡа яҙа. Ә беҙ, европалылар, һулдан уңға ҡарай яҙабыҙ. Ул беҙҙең холоҡто билдәләй. Кем һулдан уңға яҙа, уларҙы техника, байлыҡ, тәбиғәтте үҙгәртеп ҡороу, юлдарҙы төҙәтеү һ.б. ныҡыраҡ ҡыҙыҡһындыра. Был йәһәттән бигерәк тә немецтар алға киткән, уларҙа бөтөн нәмә яһалма. Ә японлар нимә эшләй? Тау тора икән, төҙә уны өйрәнә, ҡарай, шунан уның бер еренә генә нимәлер өҫтәй. Бер ҙә тота килеп уны үтәнән-үтә тишә башламайҙар. Кәрәк булғанда, әлбиттә, улар ҙа тишә, әммә күпселек осраҡта бөтөн тауға теймәскә тырышалар. Сөнки тишекле тау менән тишекһеҙ тау араһында айырма ҙур. Тауҙың үҙенең тормошо, уның да үҙенең "мейеһе", "фекере" бар, ул әллә нимәләр уйлап ултырыуы мөмкин. Уның тәбиғилегенә ҡыҫылырға ярамай. Ул йә, әммә ныҡ көслө уйлай.

Бөгөн фани донъя күҙлегенән генә ҡарап, был - тере, был тере түгел, тип айырырға ярамай. Ә инде баш мейеһенең үҙенсәлектәре күҙлегенән ҡараһаҡ, беҙ донъяны ыңғай яҡҡа үҙгәртергә теләйбеҙ икән, ул үҙгәрешне тап үҙебеҙҙән башларға тейешбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Һул ҡул менән яҙыу тәжрибәһен башлағаныма 30 йыл булып килә. Ошо ваҡыт эсендә ижади һәләттәрем асылды, тормошҡа икенсе күҙлектән ҡарай башланым, ихтыяр көсөм ныҡ артты. Сөнки уң ҡул менән һин үҙеңде көсләп яҙҙыра алмайһың, өйрәнелгәнсә яҙаһың да ҡуяһың. Ә һул ҡул менән яҙғанда, төҫ сиратта үҙ-үҙең менән килешеү төҙөргә кәрәк: 15 минут иртәрәк торорға йәки көн дауамында 15 минут ваҡыт табырға; 111 көн дауамында яҙырға. Һығымта яһау өсөн бер генә миҫал килтерәм: ошо тәжрибәне 1200-1300 кешегә өйрәттем, әммә һуңғы өс йылда шуларҙың араһынан өс кенә кеше ҡағиҙәне үтәүҙе дауам итте..." - тине әңгәмә ваҡытында Самат Әбдрәхим улы.**

**Бөгөн кемде генә алып ҡарама, һәр кем нимәгәлер зарлана, нимәнәндер ҡәнәғәт түгел. Ирекһеҙҙән шундай һорау тыуа: ә һин үҙгәреүҙе үҙеңдән башлап ҡараманыңмы?**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ

*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*

# ҮҘЕҢ НИНДӘЙҺЕҢ -

## балаң да шундай

**Ғаиләлә баланы нисек дөрөҫ итеп тәрбиәләргә? Был һорау һәр заманда ла ата-әсәләр өсөн иң яуаплы мәсьәләләрҙең береһеләр, моғайын. Психологтар әйтеүенсә, баланың киләсәктә ниндәй кеше булыуы тап ғаиләләге тәрбиәнән тора. Дөрөҫ тәрбиә нигеҙендә нимә ята? Төрлө авторҙарҙың ғилми хеҙмәттәре, дуҫтарҙың, таныштарҙың кәңәштәре һәр яҡтан үҫешкән шәхес тәрбиәләүҙә ярҙамсы була аламы? Республика ғаиләгә, балаларға, йәштәргә социаль-психологик ярҙам күрһәтеү үҙәге педагог-психологы Ринат ФӘРӘХОВ менән ошо һорауҙарға яуап эҙләйбеҙ.**

-Башта уҡ шуны әйтеп китергә кәрәк - баланы нисек дөрөҫ тәрбиәләргә тигән һорауға аныҡ ҡына яуап биреүе ауыр. Сөнки бала тәрбиәләүе - индивидуаль эш, унда бер ниндәй ҙә дөйөм алымдар булыуы мөмкин түгел. Шуны ғына әйтергә мөмкин, тәрбиә эшендә олатай ҙа, өләсәй ҙә, махсус белемле бала ҡараусы ла түгел, ә тап ата-әсә төп ролде башҡарырға тейеш.

Бөгөнгө атай-әсәйҙәр - илдә үҙгәртеп ҡороуҙарҙан һуңғы осор балалары, улар бөтөнләй икенсе ҡиммәттәр, коллективизм нигеҙендә тәрбиәләнгән, ә бөгөн иһә индивидуаллек көслө. Әлбиттә, был тәрбиә төрө яҡшы, быныһы насар тип әйтергә ярамай, әммә һәр нәмәнең үҙенең ваҡыты икәнен оноторға тейеш түгелбеҙ, икенсе ҡиммәттәр алға сыҡҡан икән, тимәк, шулай кәрәк. Мине психолог булараҡ икенсе нәмә нығыраҡ борсой. Бөгөнгө ҡатмарлы осорҙа ата-әсә донъя мәшәҡәттәрен алға ҡуйып, балаһын йышыраҡ игтибарһыҙ ҡалдыра. Беҙҙең балаларыбыҙ беҙҙән башҡа бер кемгә лә кәрәкмәй. Уны нисек тәрбиәләргә - быны ла беҙ генә хәл итәбеҙ. Иң төҙә ата-әсә ошо яуаплылыҡты тойһон ине.

Балаға ғаиләнең матди, мораль шарттары ла, ундағы психологик мөхит тә йоғонто яһай. Әхлаҡи сифаттар ғаилә ағзалары араһында ышаныс, бер-береңә ярҙам итеү, хәстәрләү мөнәсәбәттәре булғанда ғына формалаша ала. Йәғни, бәхетле шәхес формалашһын өсөн ата-әсәгә балаға ҡарата ғына түгел, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен дә, шулай уҡ йәшәү рәүешен, уйҙарын, тормошҡа ҡарашын да яйға һалыу кәрәк.

Икенсенән, ғаиләлә яратыу булырға тейеш. Ысын мөхәббәт - ул сит күҙҙәр өсөн, бәлки, күңелһеҙ ҙә тойолалыр. Ир кеше үҙен ир һәм атай, ҡатын кеше ҡатын һәм әсәй тип тоя һәм бынан кинәнес ала икән, күҙҙәр бәхеттән гел көлөп тора икән, бына ошо инде ул ысын яратыу. Тауыш-талаш, юғары хистәр, һауыт-һаба ярылыуын фильмдар өсөн ҡалдырығыҙ, был хисте ғашиҡлыҡ тип кенә атап була. Ә ысын мөхәббәт - ул күпкә тәрәнерәк хис. Атай менән әсәй бер-береһен яратҡан ғаиләлә генә бала үҙен ышанысплы тоя, ул эмоциональ яҡтан сәләмәт була. Атай менән әсәй бер-береһен ярата икән, улар балаһын да яратасаҡ. Балаңды яратаһың икән, тәрбиә эшендә барыһын да дөрөҫ эшләйәсәкһегеҙ. Шул саҡта барыһы ла аңлашылып торасаҡ, ҡайҙа тыйырға, ҡайҙа ирек бирергә икәнен дә һиҙемләйәсәкһегеҙ. Баланың тормошондағы ваҡиғалар менән ихлас ҡыҙыҡһыныу, уның балаларса проблемаларын хәл итергә ярҙамлашыу - былар ҙа яратыу билдәһе. Яратырға яратыу аша ғына өйрәтеп була, шуға сабыйҙарығыҙҙы яратығыҙ һәм яратыуығыҙҙы бер ҡасан да йәшермәгеҙ.

Бала яратыу нигеҙендә тәрбиәләнә икән, уға ата-әсәһе бер ҡасан да, теләһә нимә эшлә, тип әйтмәйәсәк. Баланы ҡыҫҡа дилбегәлә талапсан итеп тоторға була, әлбиттә, улар яҡшы уҡыясаҡ, һеҙ теләгән һөнәргә эйә буласаҡ, һеҙ теләгән түңәрәктәргә йөрөйәсәк, тик бындай балалар ҙурайғас бер нәмәне лә үҙҙәре хәл итә алмаясаҡ. Һеҙҙең маҡсат - балаға тормошта үҙ юлын табырға ярҙам итеү. Шул саҡта ул бәхетле була, алдында асылған һәр офоҡ уға бәхет килтерә, сөнки ул үҙенең юлынан бара.

Бала - ул ата-әсәнең сағылышы. Әлбиттә, ул шәхес, тик ул ата-әсәһе нимә өйрәткән, шуны ғына эшләй белә. Өлкән кешегә был насар, тип аҡыл өйрәтергә була әле, ә бала быны аңламай. Бала күберәк осраҡта ни өсөн үҙен тыйғандарын, нимәнелер эшләргә рөхсәт итмәгәндәрен дә аңламай. Атаһы, әсәйең менән талашма, тип, үҙе бер нисә минуттан ҡатыны менән һүҙгә килешә икән, йәки, тәмәке тартма, тип, үҙе балконға тәмәке тартырға сығып китә икән, бала уның нәсихәттәренән һабаҡ алмаясаҡ. Балалар беҙҙең һүҙҙәрҙе ишетмәй. Юҡ, улар һаңғырау түгел, улар беҙҙең нимә әйтергә теләгәнде аңламай, әммә улар беҙҙең ҡылыҡтарыбыҙҙы ҡабатлай. Беҙҙең һүҙҙәребеҙ һәм ҡылыҡтарыбыҙ араһында айырмалыҡтар күберәк булған һайын, шул тиклем улар донъяны аңламай башлай. Ә аңлашылмаған нәмә һәр ваҡыт ҡурҡыу тойғоһо уята. Һөҙөмтәлә, бала донъяны һәм ҡылыҡтарҙы үҙе аңлағанса ҡабул итә һәм шулай йәшәүгә ҡулайлаша.

Тимәк, кешенең ниндәй булыры бала саҡта һалына. Ғаилә институты эшләй икән, киләсәк быуын өсөн хәүефләнергә кәрәкмәй, ул физик һәм рухи яҡтан сәләмәт буласаҡ. Мәктәптә, балалар баҡсаһы ла, юғары уҡыу йорттары ла балаға, ата-әсәләр, һеҙҙең тәрбиәне бирә алмай. Эйе, кешене ҙурайғас та тәрбиәләргә мөмкин, тик был бик ауыр процесс. Өлкән кешегә нимәнелер үҙгәртеү өсөн күп ихтыяр көсө кәрәк. Әгәр ҙә ул быны нисек эшләргә белмәй икән, түңәрәк ябыла һәм кеше шунда аҙашып тик йөрөйәсәк.

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

*ҺАБАҠТАР*

# КЕШЕЛӘРҘЕ...

## аяҡтағы сөйәл кимәленән баһаламайыҡ

**Шуға иғтибар иткәнегеҙ барҙыр: теге йәки был ойошманың, предприятиеның ҡабул итеү бүлмәһендәге сәркәтип ҡыҙ-ҡатындарҙың ҡайһы берҙәре үҙҙәренең хужаһына ҡарағанда ла дорфараҡ, тупаҫыраҡ, ҡәтғиерәк була.**

Һин төбәп килгән кешенең кабинетына индермәҫ өсөн әллә ниҙәр ҡылырға әҙер улар. "Ҡабул итеү көнө түгел", "кешеһе бар", "үҙендә юҡ", "кәңәшмә бара" һымаҡ һылтау табып, килгән кешене кире сығарырға ғына торалар. Етәкселәр әллә шундайҙарҙы юрамал һайлап алалармы икән әллә, тиғән уй ҙа тыуғаны бар. Килеп ингәс, төҙә һинә белендереп, баштан-аяҡ һөҙөп ҡарап сығалар, шунан кемлегеңде, ҡайҙан килеүеңде һорашалар. Оҡшаһаң - көтөргә ҡушалар, оҡшамаһаң - үрҙә атап кителгән сәбәптәрҙең береһен атайҙар. Түҙемлегең булһа - көтәһең, булмаһа - икенсе ваҡытҡа ҡалдырып, ҡайтып китәһең. Шулай, йыш ҡына һинең бәләкәй генә йомошоңдоң хәл ителеүе лә ошо ишек төбөндәге ҡыҙ-ҡатынға бәйле була.

Хәйер, дорфалыҡты һәр ерҙә күрергә була. Кеше, нисектер, көндән-көн уҫалыраҡ була бара кеүек ҡайһы берҙә. Оло - кесене, кесе - олоно бар тип белмәй. Һүгенеп һөйләшеү нормаға әйләнгән күптән. Ҡайһы бер тапшырыуҙарҙа, шоу-программаларҙа геройҙарҙың телмәре тотош "пип-пип"тәрҙән тора. Һәр һүҙ аша "пип" сигналы ҡулланғас, нимә тураһында һөйләгәндәре аңлашылмай ҙа хатта. Эше кешеләр менән бәйле булғандар айырыуса юғары мәҙәниәтле, игпле булырға тейеш тә бит...

Яңыраҡ дауаханаға танышым янына барғайным. Постағы мөләйем медсестра күренмәгәс, бер аҙ көткәндән һуң, күрше бүлмәгә бер ниндәй шөғөлһөҙ ултырған хеҙмәткәргә өндәштем. Ә ул әллә ниндәй һүҙҙәргә барып етте. Шул тиклем белдекһеҙ икәнлегемде уның менән осрашмаһам белмәҫ инем, моғайын. Әммә ул минең кәйефемде төшөрмәне, сөнки беләм: иң һәләтһеҙҙәр һәм ҡурҡаҡтар ғына үҙенә йомош төшкәндәргә ауыһыҙ була.

Тупаҫлыҡ, һөмһөҙлөктө, ғөмүмән, бөтә ерҙә лә осратырға мөмкин. Сираттарҙа тороуҙы ҡайһы берәүҙәр әллә ниндәй тамуҡҡа һанай хәҙер. Бер минут та көтөргә яратмайҙар. Сиратһыҙ алға тығылыусылар, билдәле, арттағыларҙа ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Шунан китә бер-береһен кәмһетеү, хурлау, мыҫҡыл итеү. Йомшаҡ күңелле, сабыр кеше, әлбиттә, өндәшмәй, әр һүҙҙәре яман кешенең ауыҙынан сыға. Билдәле аҡыл эйәһе Карл Маркстың шундай һүҙҙәре бар: "Тупаҫ, тәрбиәһеҙ кеше генә аяғына ныҡлыш баҫҡан берәүҙе насар һүҙҙәр менән әрләй, кәмһетә ала, сөнки ул һәр эшкә, ҡылыҡҡа баһаны аяғындағы сөйәл кимәленән бирә". Тар күңелле, ваҡсыл, үҙ-үҙен генә ҡайғыртҡандар тураһында шулай әйткән ул. Нәҡ шундайҙар тормошта ығы-зығы, бәхәс, ыҙғыш тыуҙыра ла инде.

Һөмһөҙлөктө, тупаҫлыҡты элегерәк өгөт-нәсихәт, тәнҡит менән еңеп була ине. Хәҙер улай түгел. Тәнҡит һүҙе хәҙер кешене, киреһенсә, асыуландыра, уҫалыраҡ итә. Шуға ла тупаҫлыҡҡа тупаҫлыҡ менән яуап биреүҙән ҡасайыҡ. Дорфалыҡ менән кәмһеткәндәрҙе, хурлағандарҙы өндәшмәй ҙә еңеп була, шуны белегеҙ.

Ләйсән СӘЛИХОВА.

***✓ Әсе телле булғансы, шыма телле булыу хәйерлерәк бәғзе саҡ... Халҡыбыҙҙың ташҡа баҫылмаған әкиәттәре, йырҙары, легендалары - быуа быуырлыҡ. Шуларҙы түкмәй-сәсмәй йыйып алғанда… Бына ҡайҙа ул тел!***

- И донъя! Бына зыйлафун нишләтә кешене! - Фәрит тә йөрәкһеп һөйләнде. - Хәҙер үҙекәйендә Ҡолонташҡа тиклем күтәреп кенә алып барам.

Егет үбергә ынтылғайны, ҡыҙ сос ҡына ялтанып өлгөрҙө.

- Ашыҡма! Анау ҡайынға тиклем генә "ат" булһаң, үҙем үбәм.

- И-ин-ноһо! Ҡолап ҡалма түлке!

Фәрит кешнәп-кешнәп дүртаяҡланғас, Алмагөл уның арҡаһына атланып, ыҡсым күн сумкаһының бауы менән һелтәнә-һелтәнә "елә" биргәс, хатта ки аяғүрә баҫты: "На, малҡай!" Гәрсә һыны ҡатып көлөүҙән оҙаҡ та барманы, ипле генә сирәмгә һалыуланы. Егете, маңлай тирҙәрен һөртә-һөртә әйләнеп, алдына килеп теҙләнде.

- Йә, вәғәҙә - иман... Мин көтәм...

-Ҡуй ҙа... Әйҙә, үҙең үп. Мин күҙемде йомам.

Шул арала Фәрит кеҫәһенән балдаҡ алып, Алмагөлдөң бармағына кейҙерҙе һәм тубыҡланған килеш һөйгәнен һурып-һурып үпте.

- Туҡта, асма күҙеңде, асма. Быныһы - көмөш, йәрәшеү иҫтәлеге, ә туйҙа икебеҙ ҙә алтынын кейербеҙ. Ә төнәгөн, ҡайтышлай осрашҡанда бирәм тигәнем - ошо бүләк, бүстәк кенә... - тип ҡыҙҙың башына яҫы козыреклы, эре рауза биҙәге төшкән зәңгәр кепка-яулыҡ ябындырҙы. - Инде асһаң да ярай.

Алмагөл күҙен асып бөтөр-бөтмәҫтән әсе итеп сырылдап ебәрҙе. Ниндәйҙер һөйрәлеүсенең ҡойроғон шәйләп ҡалған, имеш.

- Йылан, ана, йылан сумды япраҡ аҫтына...

- Борсолма, туташ Юламанова, йылан түгел бит, кеҫәртке генә, - тип тыныҫландырҙы уны Фәрит. - Үрләйек Ҡолонташҡа. Ошо бөгөлдөң урта төшөндәрәк шикелле.

* * *

Йәнбәкте, килешкәнсә, Келәтаяҡ исемле ҡырын асыҡта көтөп алды Мирза. Йоҡосо егерь бер сәғәткә һуңлап килде. Матайын тау аҫтында ҡалдырған.

- Бынау күләгәлә хәл алайыҡ... - Йәнбәк ергә ятып, тубыҡтарын ыуғыланы. - Шунан? - Ыуған аяғын күтәреп төпһәгә терәгәс, егерь берәм-берәм итектәрен сисеп һалды.

- Давай, әҙ-мәҙ йотайыҡ, һыуһынды баҫа торған ул хәмер. Ашанып алырға ла ваҡыт.

Мирза арҡаһынан һалдат тоҡсайын ергә һалып, һәләт кенә ауыҙын асты.

- Мәйлең! Мин дә сарсаным.

- Мә, эсеңде тишмәҫ. - Йәнбәк сытыйып әҙ-мәҙ эсте лә юлдашына һалып бирҙе.

- Бажалый. Баш та зеңкей шауа-ты... - Мирза ҡарышмай ғына ризалыҡ бирҙе һәм ярты йотом ғына араҡы һемерҙе.

- Кимәлйегән үксә һыҙлай, көн боҙолор, ахыры, - тип зарланғайны Йәнбәк, Мирза быны яҡшыға юраны.

- Бирһен Хоҙай! Ҡоролоҡ булмаһын берүк! Заманалар ауыр... Иген уңһа, исмаһам, тауарҙың хаҡы төшөр ине.

- Ауһар. Менгән хаҡтар кире төшмәҫ. Юҡты ләпелдәгәнсе, һиңә секретный ғына һорауҙарым бар, абзый. - Йәнбәк бер ҡарыштай ғына Мирза эргәһенә шылышты. Мирза ғәмһеҙ кеүек, әммә егерға секерәйеп ҡараны.

-Ә-ә-ә... Анау сағында?..

- Тарзан сағында, тиң дә ҡуй инде.

- Эйе, шул мәлдә һин пулемет тапҡанһың, тиҙәр. Шул дөрөҫмө?

- Кеш-ше хәбәре йә дөрөҫ, йә алдаҡ инде ул.

- Йәшермә, мин берәүгә лә ләм-мим.

- Йәшермәйем дә... Бер дәү имән яртылаш ҡолаған, шуның тамыры төбөндә брезент осо күреп ҡалдым. Ә-һә, соҡоп сығарһам - "Максим"! Майлы ғына, патроны - дүрт ҡумта. Атып ҡараным -во бытырлаҡ! Йәтеш-шләп кенә кенә урап, кире күмеп кит тә бар мин.

- Хәҙер иҫләйһеңме? - Устарын ыуып ҡалҡынды Йәнбәк, маңлай тирҙәрен һыпырғыланы.

- Яҙа-йоҙа ғына... - Кеше-фәлән юҡмы тигәндәй, бышылдарҙан алда Мирза алан-йолан ҡаранды. - Ҡаланан са-саперҙар килде эҙләргә - тапманыҡ "Максим"ды. Хан заманғы ҡоралды, эй, таптырҙы минән аҙаҡ гражданский кейемдәге чекист. Тау сикһеҙ, ә ҡайһы үҙәктә күргәнем хәтерҙән осҡан.

- Элек ошо тирәлә тәүҙә аҡтар, аҙаҡ ҡыҙылдар яғында отряд йөрөгән, - тине Йәнбәк, берсә көрһөнөп, берсә елкенеп. - Ана, ҡартайғансы ата коммунист булып үлде ләһә ун былтыр, теге... немтуй ҡарт. Шул да әйткән: гражданский һуғышта фәлән ергә "Максим" күмдек, тип. Әллә ниндәй хазина, әллә күпме ҡорал яталыр әле Олотау ҡуйынында!

- Булыр. Ана шу-шул пулеметты ҡара... ҡараштырайым тип тә эйәрҙем мин бөгәсә һиңә. Матайға әүрәне был иҫәр йылҡы һәләк үтә баҙарҙа, без холестерина тип, урыҫ та эҙләп кенә йөрөй!

- Әл-лә, әл-лә... - Мирза ни һөйөнөргә, ни көйөнөргә белмәне. Урман "кәртә"һендә ҡырағайланған да булһын ти әлеге өс ат, барыбер ҙә хужаларын табыу фарыз. Донъяла һәр малдың эйәһе бар.

- Былай итәбеҙ, абзый: төштән һуң, бер-ике сәғәттән, ул аттар, моғайын, һыулауға төшөр. Шул саҡта һунар асырбыҙ, тим. Уларҙы өҫтән аҫҡа, сеткаға ҡыҫтарбыҙ. - Йәнбәк, күләгәле ер табып, ҡырын ауҙы. - Берәй сәғәт сырым итәйек тә... Аяҡ та шешкән, к черту.

- Һин ял ит, мин яҡын-тирәне ҡараштырам. Шауа-ты "Максим" ошондараҡ кеүек.

- Ну-у баш үҙеңдә! Тик яҙатайым йыраҡ олаҡма.




тиһеңме? Ю-у-уҡ, юҡ. Малай-һалай табып, атышып ҡуймаһын, тим. Ипле генә һөйләшеп, ҡушып китте ваянныйҙар: ағай, тинеләр, иҫеңә төшһә, урынын яҙып-һыҙып ебәр, тип, хатта адрес ҡалдырҙылар. - Мирза, бер килке шымып ултырғас, ҡапыл ғына һорап ҡуйҙы. - Ни бысағыма һуң "Максим" һиңә?

- Музейға тапшырҙыҡмы, әжере гатауай, ти. - Йәнбәк усын усҡа ыуҙы. - Ҙур ҡоралға күберәк түләйҙәр.

- Аҡсанан ҡарыҡҡанһыңдыр һин? - Быны Мирза ярһып әйтте, хатта Йәнбәк, тыңлаусы хеҙмәтселәй, аҙыҡтарҙы йыйыштырырға кереште.

- Бөттө-китте... Теге юртаҡтың эҙенә төшәйек тәүҙә. "Максим" - бүстәк. Пулеметсы Анка эҙләһен уны, ха-ха.

- Бүтән йомошоң юҡмы? - Мирза буйҙаҡҡа бармаҡ яныны. - Ҡыуышта ла шауа-ты ләпелдәнең, мәйтәм, әллә бербер?..

- Аҙаҡ, аҙаҡ. Уныһы бигерәк тә сауаплы йомош. Юлыбыҙ ғына уңһын! - Йәнбәк ситкәрәк янтайҙы ла штормовкаһын ҡаҡҡылаған булды. - Тфү-тфү, бында беҙ ултырманыҡ, шайтан ултырҙы...

...Тороп, кейенешеп, оҙаҡ ҡына ҡая типһәненә яҡыныраҡ барғас, Йәнбәк, моноклдән ҡарап, ниҙер шәйләгәйне, һағайып-һиҫкәнеп телгә килде:

- Стоп! Бер, ике... юҡ, өс ат өҫкө әрәмәгә сумды. Мә, ҡара бынауҙан.

Мирза иһә эҙҙәрҙе моноклдән һынамсыл ҡарап һөйләнде.

- Тә-әк, тәк, дағалыһы, иң арттан...

- Ур-ра! - Йәнбәк Мирза тирәләй сөйрәлөп, тумһаҡ бите яҙылып, һөйөнөстән ифрат осондо. - Өс баш йылҡы! Бер ҡыйындың бер рәхәте! Тотайыҡ, тереләй тотайыҡ! Күпме байлыҡ!

- Һ-ы! Ниндәй байлыҡ! Ниңә ул тиклем шашаһың?.. Ебәр мине, вәт әй.

Йәнбәк ҡая ситенән бирерәк, хәүефһеҙ уйпатҡа атлап, карабинын һауала еңеү даулаған ише болғай-болғай, эй ҡабарҙы, эй ҡупайҙы:

- Бындағы һәр тере йән эйәһенә яңғыҙым, ә юҡ, давай - беҙ икәү хужа, белдеңме? К черту, зонаға бер ниндәй ҙә мал йә йәнлек инергә тейеш түгел: военныйҙар шуны теләй. Ингәндәрен атып йығабыҙмы, һуябыҙмы, һатабыҙмы - рөхсәт. Итләтә елгәрһәк, һо-о, хәҙер

- Үҙең аслан ошонан китмә, - тине Мирза. - Моноклең миндә булыр.

* * *

Фәрит менән Алма Ҡолоҡай ярынан уҙышлай Ҡоҙғон имәнес ҡурҡылдағас, ҡыҙ артыҡ ҡәһәтләнмәй генә телгә килде.

- Көш, ҡәһәрле ҡош! Өләсәйем әйтмешләй, үҙ башыңа...

- Өләсәйеңдең ҡыҙ сағын да хәтерләйҙер әле ул ҡоҙғон, - тине егет ауыҙ сите менән генә йылмайып. - Тауышына ҡарағанда, күпте күргәнгә оҡшай.

Дүрт тарафтан тәпәш, әммә ҡар ҡунмаҫ текә ҡаялар уратымындағы болон үҙе ҡырыҫ, үҙе әкиәти хозур. Ялан уртаһында йәшмә таштар сурайып ята. Берәүһен ҡырҙан хас атҡа оҡшатырға мөмкин. Яҡынайған һайын кесерәйә барғандай, барыбер ҙә дәүмәле ҡәҙимге ҡолондан күпкә еллерәк.

Һирәк үләнле ваҡ ҡырсынан атлауы рәхәт. Күрәһең, яҙҙарын ҡаялар араһынан ireп аҡҡан ҡар һыуҙары болондо артыҡ йәшеллеккә күмдермәйҙәр.

Йәштәр өнһөҙ генә, күңелдәре арбалып, боронғо башҡорт наҙлап Ҡолоҡай, Ҡолонташ тип атаған изге урынға яҡынайҙы. Зәңгәр күктә зәңгәр күлгә һибелешкән аҡҡош себештәре ише күкһел болоттар ағыла.

- Әллә ниндәй тойғолар биләй мине, Фәрит, - тине Алма әҫәрләнеп. - Гүйә минең өсөн ваҡыт тигән толпар туҡтап ҡалды. Гүйә мин дә, һин дә, Ҡолонташ та - мәңгелек. Хыялланған ереңә алып килдең, рәхмәт. Бөтәһе лә йола буйынса башҡарылһын, мин... уф, Аллам, мин - риза. Бая әйткәнемсә, әртисләнә беләһең. Ике әртискә оя ҡороуҙары, айһай...

- Ярай, һинеңсә булһын. - Егеттең сырайы яҡтырҙы.

- Һинеңсә лә, минеңсә лә булһын, бисмиллә... - Ҡыҙ быны тубыҡланып, ярым бышылдап әйтте. - Башла!

- Һаумы, ҡөҙрәтле Ҡолонташ! Бына беҙ, Фәрит менән Алмас, ямғыр теләр, илгә тыныслыҡ теләр өсөн... - артабан егет ҡыҙҙың ҡулын аймап дауам итте, - онотолған йоланы яңыртып, һинән фатиха алырға килдек. Беҙ һинең эргәңдән... Ир менән Ҡатын сүрәтендә етәкләшеп ҡайтырға ниәтләйбеҙ. Әгәр теләктәребеҙ ҡабул ҡылынһа, балаларыбыҙҙың балаларына ла һинең янға илтер һуҡмаҡты онотмаҫҡа ҡушырбыҙ...

- Ай, Фәрит, кеше юҡта телең харап шыма икән дә! - Алма ҡәнәғәт кенә баш сайҡаны һәм, козыреклы яулығын сисеп, муйын тирәһен елпеүесләне.

- Әсе телле булғансы, шыма телле булыу хәйерлерәк бәғзе саҡ... Халҡыбыҙҙың ташҡа баҫылмаған әкиәттәре, йырҙары, легендалары - быуа быуырлыҡ, - тине ҡалҡыуҙан Фәрит, ике ҡулын киң йәйеп. - Шуларҙы түкмәй-сәсмәй йыйып алғанда... Бына ҡайҙа ул тел!

- И, борғосла зыйлафуныңды, яҙҙыртайым берәй лаҡап.

- Ысынмы? Йә һуң, йә... - Егет һәләт кенә мобилкаһының диктофонын көйләй һалды.

- Юҡ, тәүҙә - репетиция... - Алмагөл тамағын ҡырып, диктофонды ауыҙына яҡынайтты, тауышын үҙгәртте. - Ҡолонташты алъюҫыҡҡа рәнйеткән кеше бәләгә тарыр, тигән ырым бар. Элегерәк дыуамал һунарсы ошо таш һынды тоҡтомалға таяҡ менән рәнйетә. Ҡайтышлай аяғы сурт һына быны, эте ха-ап - ҡапҡанға баҫа...

- Ҡуйсәле, тәмләп аҙаҡ һөйләрһең... Тәүҙә, Алмасҡай, үткәндә үҙең тыңлап бөтмәгән хикмәтте ишет. Баҫ кнопкаға, тыңла әле шуны. - Егет мобилкаға ымланы.- Ә мин әҙ генә өҫкәрәк йөрөп әйләнәм. Шишмә башы булырға тейеш унда. Һыуы һәләк шифалы, еңелсә тоҙло, тиҙәр.

- Йөрөмә, мин ҡурҡам. - Алмагөл әллә ысын, әллә юрый бөршәйҙе, тауышын нескәртте, - Ҡолоҡай тибеп ебәрмәҫме?

- Ҡурҡһаң, мә, минең кәпәсте кей. - Төлкө тиреһе менән ҡаймалы кәпәсен сисеп ҡыҙға һондо ла, йыуатырҙан өҫтәне. - Йылҡы малы нәфис затҡа аслан типмәй.

- Бир әле, бир. - Алмагөл, өс тапҡыр "тфү" тип, кәпәсте кейеп алды. - Булды! Килешәлер, тим?

- Харап килешә, киноға төшөрлөк. Ниңә төкөрөнәһең ул? Абыстай һымаҡ...

- Төкөрмәйсә кейһәң, кәпәс эйәһенең өс көнлөк һөйәркәһенә әйләнәһең. Шундай юрамышты ишеткән бар.

- Кәмит икән! Мин һине өс көнгә түгел, ә мәңгелеккә йәр итәм.

- Алла теләһә, тиең.

- Шулай тим бит. - Егет мобилкаһының диктофонын ҡабыҙып, китергә ыңғайлағайны, ҡыҙ артынан ҡысҡырып ҡалды.

- Фәрит, һин һыҙғырып йөрө, йәме. Эй шашам бөгөн, эй көләм... Хәйерлегә булһын: бая үҙеңде ат итеп мендем. Йөрәгем дарҫлайсы?!

Фәриттең "Урмандарға керһәң..." көйөн һыҙғырғанын тиҙҙән уның монологы күмде. Алмагөл иһә үҙ алдына һөйләнде.

- Сәхнәлә бейегәнемдән... Дүрт йыл элек үк ғашиҡ! Һи, зәб-зәү. Дүрт йыл элек нимә ҡараның һуң?! Көләүемде лә, атлауымды ла ярата! Ә мин һинең аҫмалы күперҙән ҡармаҡ һалып торғаныңды соландан ҡыҙығып, ә юҡ, ымһынып, оҙаҡ күҙәтә торғайным... Өс йыл элек... - Манекенщица кеүегерәк аҙымлағайны - нимәгәләр абынғас, төкөрөнөп, ҡабат тыңларға тотондо. - Сәстәремде... билкәйемде... муйынымды... Бәй, яратмаған ни ерем ҡала һуң, Фәриткәйем? - Алмагөл диктофонды туҡтатты, аптыранды. - Ә вәғәҙәләр бирмәйһеңме ни? Китаптарҙағы, киноларҙағы ише баллымайлы вәғәҙәләрең ҡайҙа, дуҫҡай? Әтеүсә, ризаһыңмы, имеш! Уныһын да... - диктофонға бармаҡ янап, арҡаһы менән бороло, - бынау зыйлафун төпсөнә бит әле. Артабан тыңлайыҡ, ни һайрарһың? Бәй, бөттө...

Ҡыҙ, диктофонды һыйпай-үбә һалып, кире Ҡолонташ өҫтөнә ултыртты.

- Вәт замана егете! Һөйләфундан ғына тәҡдим яһай бит. Йә, ярар. Һайланып йөрөнийһәң, ирһеҙ ҡалыуың бар, тип киҫәтә ләһә өләсәйем. Кейәүгә сығыу...

✓ *Илдәге үҙгәртеп ҡороуҙар, колхоз-совхоздарҙың бөтөрөлөүе лә беҙҙе ошондай хәлгә килтереп еткерҙе. Бөгөн килеп, был тулҡын ауылды бөтөнләй сайҡалдырып, тарих даръяһында аҙаштырып ҡуйыр төҫлө.*

шөрләтһә лә, барам мин һиңә, Фәрит, һиңә генә булам!

Ҡолонташты ҡосаҡлағайны - Ҡоҙғон ҡурҡылдап ебәрҙе. Алмагөл ырғып торҙо ла хафалы тауыш бирҙе.

- Фәрит , һин ҡайҙа? Әһә-әү...

- Хәҙер, хәҙер. - Фәрит, йүгерәатлай килешләй үк, яңылыҡтар менән уртаҡлашты. - Бая эҙ күргәйнек бит әле, ана шул аттарҙың һыулауы ошонда булырға оҡшай. Нисек, ҡасан кергәндәрҙер, ғәжәп?

- Беҙ кергәнде...

- Беҙ тоҙаҡ аҫтынан индек. Разведчиктар һымаҡ.

- Тотоп менәйек тә йырлап ҡына ҡайтып китәйек. Һыбай йөрөргә ныҡлап өйрәндем мин. Турбазала. Аттар шунан ҡасҡанмы әллә?

Алмагөл уйынлы-ысынлыраҡ һөйләнһә лә, Фәрит етдилеген юйманы.

- Берәүһе генә дағалы, ҡалғандарының ҡатаһы лапшайып бөткән. Тотторор тиһеңме мустанг ише ҡырағайланып бөткән...

- Ә мин - тотам. Арбау көсө бар, шикелле, миндә.

- Шикелле генә микән?! - Фәрит таш ҡолон һыртындағы диктофонға ымлап белеште.- Тыңланыңмы? Быныһы - етдиерәк...

- Рәхмәт етди һөйләфуныңа. Алдашмай, шикелле. Ышандырҙы мине, ышандырҙы...

Фәрит шатлыҡтан ярһып ҡосаҡларға уҡталғайны, Алмагөл ситкә янтая һалды һәм шарт ҡуйҙы:

- Тәүҙә ямғыр теләйек. Ниңә килдек, улайһа, бында? Өс көн буйы ҡоторттo берәү... Шунан ҡыуыш ҡорорбоҙ, йәме?

- Ямғыр яуһа, ҡормай сарабыҙ юҡ. -Фәрит, көләмһерәп, Алмагөлдө биленән ҡосаҡланы. - Ҡара болот эйәләшә, ана.

- Аулаҡҡараҡ яһа ҡыуышты. - Алмагөл һаман килерәк һөйләнгән кеүек. - Юғиһә...

- Нимә " юғиһә"? Ер йөҙөндә ошонан да аулаҡ урын юҡтыр.

- Ҡолоҡайҙан оялам. - Ҡыҙ егеттең күкрәгенә башын терәне. - Ярай, күрһәт инде һөнәреңде. Әтеүсә, күп көләм. Күп көлһәм, аҙаҡ балауыҙ һыға торған ғәҙәтем бар минең.

- Сабый саҡта мин, урыҫса һөйләй торған бабайы ҡайҙа тип, өйҙәге радионы һүтеп ташлағанмын. Ә бының "бабайы"н күрмәнеңме?

- Бабай шәп! Ҡибла ҡайҙа әле ул? Әһә, ауыл яғында...

Диктофонды һонғас, Фәрит елкенеп китте, ә Алмагөл ҡабат тубыҡланды.

- Ямғыр яуып ебәрһә, мәслихәт инде! Йә, һин теләк әйт, мин Ҡолоҡайҙың арҡаһынан һыйпайым.

Йәштәр әкрен генә Ҡолонташҡа шылышты. Фәрит ҡулын күкрәгенә терәп теләк теләне.

- О хикмәтле үә ҡөҙрәтле Ҡолонташ! Күрәһеңме, бар тереклек дымға сарсаған, шишмәләр ҡорғаҡһыған. Яуҙырһаңсы шифалы ямғырыңды. Ҡарт-ҡоро донъяның кендегенә һанай һине, ышандыр беҙҙе шуға. Яуҙыр ямғыр, яуҙыр...

- Һамаҡлау кәрәктер. Яу, яу, ямғырым, әллә нимә бирермен, типме шунда... Туҡта, училищела әҙмәҙ һабаҡ алғайныҡ, - тип йоланы белгәненсә тәртипкә һалды Алмагөл. - Дәрескә бер шиғыр ятлап килгәйнем. Бабичтыҡы, буғай. Хәҙер һин ҡолондо һыйпаҡлап тор... Иркәлә, наҙлап ҡына һөй.

- Ярамай, Алмагөл, ямғыр теңкәгә тейһә генә, май-бал һылап, инәлесле иркәләгәндәр. Киреһенсә, хәҙер уны һуҡҡыларға кәрәк. Әйҙә илаһын - күҙ йәштәре ямғыр булып аҡһын. Давай, туҡмайыҡ! - Фәрит ендәрен һыҙғанды. - Шулай һөйләгәйне миңә олатайым.

- Ҡара уны, ямғыр күп яуып, анау йылға һымаҡ быуаларҙы йырып, күперҙәрҙе ағыҙып ҡуймаһын. - Алмагөл ихлас хафаланды. - Кеше үлде...

- Ә беҙ Ҡолоҡайҙан, туфан ҡалҡыт, тип һорамабыҙ, бары тик йылы ямғыр, көслө ямғыр ялбарабыҙ. - Сыбыҡ алып, егет ташты "бешкәндә", ҡыҙ теләк әйтте. Икеһе лә ихлас ҡылана ине. - Йә, бисмилла!

Яу, яу, ямғыр, яу, ямғыр,
Беҙгә килеп ау, ямғыр,
Имсәктәрең һау, ямғыр,
Яу, яу, ямғыр, яу, ямғыр!
Һыуһаныҡ, һыуға ҡандыр,
Һәр ерҙән тамсы тамдыр…

Онотоп та барам. Оҙон ғына ул шиғыр.

- Беҙ бында килербеҙ әле! - тине Фәрит хис менән. - Йәй һайын...

- Еләнемдән тәңкә өҙөп һалам изге ҡолон тояғына... "Фәрит менән Алма йөрөй. Ике һәптән..." Ниңәлер өләсәйем шулайыраҡ һуҡраныр кеүексе? Беҙҙең бында йөрөгәнде әлдә белмәй. Әллә һөйләремме үҙенә?..

- Әлмисаҡтан ата-олатайҙар килгеләп йөрөгән, һинеңсә, улар ҙа һәптән булғанмы?

- Юҡ та, Фәрит, мыжырға әҙер генәһең.

- Мыжымайым, әйтәм: илһам йөрөткән, ышаныс, оло өмөт йөрөткән уларҙы! Их, бисәм, бында беҙҙе лә хыял, өмөт әйҙәне бит. Мин - бәхетле, бик тә бәхетлемен, тип һөрәнләгем килә! Шулай, кәләш!

- Һөрәнлә һуң! - Алмагөл, ҡапыл ғына иҫенә килгәндәй, шыма биреп, аптырауын да өҫтәне. - Абау, тәүҙә "бисә" тинең, аҙаҡ - "кәләш"... Хәҙер ҡысҡырып тороп әрләйемме үҙеңде?

- Ҡуй, әрләмә, тау эйәһен өркөтмәйек.

- Бә-әй, уныһы ла бармы ни әле?

- Ышанһаң, мөғжизәләр күп ул донъяла. Йыһандың да сиге юҡ, тиҙәр ине элегерәк. Ана шуның киреһен иҫбатлай хәҙерге ғалимдар.

- Рәхәт... Әллә ямғыр еле өрә, һиҙәһеңме, Фәрит? - Алмагөл йәнә тауышын баҫып һөйләнде: "Мин, ярай, кәләш, ти, ә һин кем миңә? Ирем тиәйемме?"

- Ағас баштары хәтәр шаулай. Йәһәт кенә, фатир ҡорайыҡ. Икебеҙ һыйырлыҡ ҡына итеп. Йүкә, муйыл япраҡтарынан күпертеп түшәк йәйәм. Бал еҫтәре, аһ!

- Анау ышыҡҡа ҡор. Мин... мин шишмә башын ҡараштырып киләм. Унда ла тәңкә һалам. Юғалмаҫ, беҙҙең ҡабат килерҙе көтөп ятыр.

- Аҙашып ҡуйма!

Етеҙ генә икеһе ике тарафҡа йүнәлде. Егет йүгерекләп япраҡлы ботаҡтарҙан япма әтмәләгән саҡта, Алмагөл күренде. Ҡулында - гөлләмә.

- Фәрит, Фәрит, һыулауҙа матур йәш бейә күренеп ҡалды. Йүгәне лә бар, буғай. Тотоп апҡайтайыҡ, әйҙә. Хужаһы эҙләйҙер.

- Әлләсе... - Фәрит, икеләнеп торғандан һуң, өҙә һуҡты. -Ярай, апҡайтырбыҙ ҙа гәзиткә иғлан бирербеҙ.

- Дөрөҫ, хужаһы шундай атҡа әжерен лә йәлләмәҫ. Ә мин, күрсе, өс екән тумалағы, ике бөртөк ҡыҙғылт гөл йыйҙым. Боланут ти быны башҡорт, ивандар иван-чай ти. Сәйе бик тә файҙалы, элек, һинд сәйе таралмаҫ борон, Англия королеваһы эскән, шәт.

Ел һыҙғырҙы, һауалар дөмһәрә барҙы.

- Алмаҡай, йәһәтерәк кил, эргәмә кил. Аяҙ ҡыуышыбыҙ хәҙер әҙер була. Сәскәнде ҡыуыш түбәһенә ҡаҙа...

- Анһат - бармайым! Квартирһыҙ кешегә тормошҡа сығыу модаһы бөттө хәҙер. Улай тиһәң, өйбаҫарҙар ҙа күбәйә. Инәләр ҙә берәйһенә загсһыҙ-ниһеҙ... Абау! - Алма шат, көлә, гөл болғап бейегәндәй итә. - Ямғыр күҙе төшә! И мәрхәмәтле Ҡолоҡай, әллә ысынлап беҙҙең теләкте ҡабул иттеңме?

- Бесән мәлендә ялҡауҙар... - Фәрит, эшенән айырылып, көйләп бейергә кереште.

Яу, яу, ямғырым,
Ҡырын төшөп ятырым...

Ҡапыл сатыр-сотор йәшен атҡайны, донъялар яҡтылы-ҡараңғылы булып китте. Ни ғәжәп, шул арала Фәрит ыңғырашып ергә салҡатан ҡоланы.

Ямғыр шыптырлап әҙ генә яуғас, шып туҡтаны, хатта донъялар ҡапыл һил булып ҡалды.

- Фәрит! Фәрит, тим. - Алмагөл егеткә эйелде лә ҡобараһы осоп тайшанды. - Тәне күгәрмәгән һымаҡ... Уф, әллә йәшен йыға атты инде?.. - Ятып күкрәген тыңлағас, тәнен ҡапшап ҡараны. - Йөрәге тибә кеүек...

Тубыҡланған килеш ҡыҙ ҡулдарын күккә һондо.

- Йә, Хоҙайым, ниңә улай ғәзелһеҙ һин! Әллә мине ҡыҙ ғына көйөмә тол итергә самалайһыңмы? - Егетте күтәреп тә ҡараны, һөйрәкләп тә маташты - көсө етмәй. - Һыулауҙа йәш бейә йөрөй! Менеп кенә һыпыртайым ауылға! Фельдшер матайында выжт килеп ҡарар... Докторға биргеһеҙ, тип маҡтайҙар үҙен! Мужыт, вертолет саҡыртыр.

Ямғыр быҫҡаҡлағанға кинәнгәндәй, ҡоштар күңеллерәк сырҡылдашты, бөжәктәр япраҡ аҫтарына ҡыҙыу һылышты. Алмагөл һыулауға йүгереп барҙы. Бейә әллә ни алыҫ китмәгәйне. Ҡыҙ үҙенә ныҡ яҡынайғас, Ирәндек ситкәрәк тайшанды. Алмагөл уға ҡулдарын һоноп инәлде.

- Һөйгәнем ауыр хәлдә, ишеткәнһеңдер әлеге хәтәр йәшнәүҙе. Ҡасма, китмә, аңла мине: һинең дә йәрең барҙыр бит. Ҡана, ауылға ҡайтып киләйек тиҙ генә, ялыңды дегәнәктән таҙартырмын аҙаҡ.

Ирәндек, шикле ҡараштарын ҡыҙҙан алмай ғына, төпкәрәк сигенде, Алмагөл дә унан ҡалышманы, шунан икеһе лә шып туҡтаны.

Ни ғәжәп: Ирәндек Алмагөлдөң алдына уҡ килде һәм ҡыҙ уның ҡаты арҡаһына еңһеҙ бәрхәт камзулын йәйгәс, эргәләге тамыр төпһәһенә баҫып, һыбайланды.

- Әйҙә, малҡай! - Йүгәнһеҙ-ниһеҙ йәш бейә ҡыҙға буйһондо.

**(Аҙағы. Башы 30-31-се һандарҙа).**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҠАЙҘА БАРАБЫҘ?

## Һеперткене лә ситтән алғас инде…

**Азамат ТАЖЕТДИНОВ, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, РФ-ның халыҡ мәғарифы алдынғыһы:**

- Уйландырған мәсьәләләр күп инде ул. Уларҙың һәр береһе тураһында айырым һөйләшергә булыр ине. Шулай ҙа бөгөн мин уларҙың бер-нисәүһенә генә туҡталып, уларҙы хәл итеү юлдарын нисек күреүем тураһында уртаҡлашырға теләйем.

Мине хафаға һалған хәл ауыл менән бәйле. Төбөнә төшөп ҡараһаң, әле мин атаясаҡ проблеманың осо әлеге лә баяғы илде үҙгәртеп ҡороуҙарға килеп төртөлә. Ауылдарҙың бөтөүгә табан барыуы тураһында әйтәм. Колхоз-совхоздар тарҡалғас, йәштәр эш эҙләп, ауылдарҙы ҡалдырып, ситкә китә башланы, һөҙөмтәлә ауылда тыуым кәмеп, демографик көрсөк килтереп сығарҙы. Йәштәребеҙ ғаилә ҡororға ла атлығып тормай шул. Әлеге лә баяғы социаль проблемалар йәш кешенең бәкәленә һуға. Шулай, өйләнмәйенсә, 40 йәштә лә буйҙаҡ йөрөүселәр күп. Балалар һаны аҙ булыуы арҡаһында урта мәктәптәр - тулы булмаған урта мәктәптәргә, ә һуңғылары - башланғыс мәктәптәргә әйләндерелә. Ҡайһылары бөтөнләй ябыла. Ә хәҙер тарих биттәрен аҡтарып, аҙ ғына артҡараҡ - совет осорона күсерәйек иғтибарыбыҙҙы. 50-60-сы йылдарҙа бәләкәйерәк ауылдарға киләсәкһеҙ, йәғни, "перспективаһыҙ" мөһөрө һуғылып, уларҙы бөтөрөү тураһында бойороҡ төшөрөлгәс, был ауылдарҙың мәктәптәрен, медицина пункттарын ғына япҡайнылар. Әйткәндәй, ул саҡта балалар ҙа күп - һәр ғаиләлә уртаса һигеҙ бала ине әле. Мәктәптәр ябылғандан һуң, кешеләр аҡрынлап сит яҡтарға күсенә башланы. Күпмелер ваҡыттан һуң элек шаулап торған ауылдар урынында мейес, өй нигеҙҙәре генә тороп ҡалды. Беҙҙең Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауыл хәкимиәтендә генә 10 ауыл (Ҡуяндар, Мәтем, Аҡтырнаҡ, Һарыбейә, Мырҙый, Тәкәһуҡҡан, һ.б.) кешеләре ошондай яҙмышҡа дусар булды. Шул тактика әле лә тормошҡа ашырыла һымаҡ тойола. Тик бөгөн был турала өндәшмәйҙәр генә. Былай барһа, киләсәктә дәүләтебеҙҙән дә ни ҡалыры билдәһеҙ... Ошо урында бер билдәле ғалимдың һүҙҙәре иҫкә төшә. Яҡынса әйткәндә, ошондай мәғәнә ята уның һүҙҙәрендә: "Теләһә ҡайһы дәүләттең бойондороҡһоҙлоғон уның аграр өлкәһенең бойондороҡһоҙлоғо гарантиялай... " Был һүҙҙәр менән килешмәү мөмкин түгел. Хәҙерге Рәсәй йәшелсә-емештән алып, һеперткегә тиклем сит илдән һатып ала башланы. Илдәге үҙгәртеп ҡороуҙар, колхоз-совхоздарҙың бөтөрөлөүе лә беҙҙе ошондай хәлгә килтереп еткерҙе. Бөгөн килеп, был тулҡын ауылды бөтөнләй сайҡалдырып, тарих даръяһында аҙаштырып ҡуйыр төҫлө. Ысынлап та, үҙен-үҙе туйындыра алмаған дәүләттең яҡты киләсәге тураһында һүҙ булыуы мөмкинме икән?

Ошондай хәлдәргә тарыуын-тарығас, иң беренсе үҙебеҙгә һаҡланып ҡалыу хәстәрен күрергә кәрәк, туғандар. Телебеҙҙе һаҡлаһаҡ, юғалмаҫбыҙ. Телебеҙ һаҡланһа, мәҙәниәтебеҙ ҙә юғалмаҫ, рухыбыҙ ҙа ныҡ булыр. Икенсенән, тырышып эшләйек. "Алма беш, ауыҙыма төш", тип кенә, тамаҡ туймай ул. Ә бит халҡыбыҙ бер ваҡытта ла ошо мәҡәлдәгесә йәшәмәгән, үҙ йүнен үҙе йүнләп көн күргән. Ошо ике нәмәне онотмаһаҡ - телебеҙҙе, рухыбыҙҙы имгәтмәй һаҡлаһаҡ, йүнселлегебеҙҙән яҙмаһаҡ, бер ниндәй үҙгәрештәргә бирешмәҫбеҙ.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

✓ *Иң тәүҙә тартыусы үҙенең ауырыуын танырға һәм һауығырға теләргә тейеш. Сирен йәшергән - үлгән, тигән халыҡ. Закон тартырға ташларға ярҙам итмәһә лә, ыңғай яҡтары бихисап уның.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БЫСРАҠ ҺАУА...
## сир сығанағы

■ Environmental Research Letters журналында атмосфера бысраныуы һөҙөмтәһендәге үлем осраҡтары статистикаһы баҫылған. Тикшеренеүселәр фекере буйынса, йыл һайын бөтөн донъяла атмосфера бысраныуы һөҙөмтәһендә тыуған сирҙәрҙән 2,1 млн кеше үлә. Кешелек эшмәкәрлеге тирә-яҡ мөхитте бысратып ҡына ҡалмай, озон ҡатламын да боҙа. Был респиратор ауырыуҙары, астма, үпкә яман шеше сирҙәрен барлыҡҡа килтерә. Бысратылған атмосферанан бигерәк тә Көнсығыш һәм Көньяҡ Азия илдәре зыян күрә. Насар һауа ауырлы ҡатындарға ла йоғонто яһай, шуға ла төрлө зәғифлек менән тыуыусы балалар һаны күбәйә барыуын ғалимдар күптән асыҡлаған.

■ Британия ғалимдары кәйеф булмағанда туңдырма ашарға тәҡдим итә. Улар туңдырманың мөғжизәле сифатына ғилми аңлатма ла тапҡан. Лондон тикшеренеү институты хеҙмәткәрҙәре был татлы ризыҡты ашағандан һуң кешенең баш мейеһендә барған процестарҙы МРТ ярҙамында күҙәткән. Баҡтиһәң, туңдырма баш мейеһенең шатлыҡ тойғолары барлыҡҡа килә торған өлөшөнә йоғонто яһай икән. Был зонаны әүҙемләштереү өсөн бер балғалаҡ туңдырма ашау ҙа етә. Ғалимдарҙың иҫәпләүе буйынса, һәр кеше йылына уртаса 12 кг туңдырма ашай. Был ризыҡ айырыуса йәй көндәре популяр. Әммә оҙайлы эселәрҙә кешенең иммунитеты насарая, шуға ла көн эҫе булған өсөн генә туңдырма ашамағыҙ, ангина эләктереүегеҙ бар. Туңдырманы ҡәнәғәтлек алыу өсөн ашайҙар, тип тағы бер иҫкәртә табиптар.

■ Ғаиләләге конфликт ваҡытында партнерҙар икенсе яртыһы уның фекеренә өҫтөнлөк биреүен теләй. Бэйлор университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ир менән ҡатын ситуацияны контролдә тотоу өсөн көрәш һөҙөмтәһендә һүҙгә килешә, тип яҙа Меддэйли. Ғалимдар 455 өйләнешкән пар араһында һорау алыу ойоштора. Уларҙың йәше 18-ҙән 77-гә тиклем, ә бергә йәшәү ваҡыты 1 йылдан 55 йылға тиклем була. Асыҡланыуынса, ғаиләлә ниндәйҙер мәсьәлә буйынса тауыш сыға икән, һәр кеше был ситуацияны контролдә тоторға тырыша. Исемлек буйынса икенсе аҙым булып ирҙең йәки ҡатындың икенсеһе яртыһына күберәк ирек биреп, үҙенең гәйебен танып, уның фекерен өҫкә сығарып, компромиска барыу тора.

■ Испания һәм Италияның бер төркөм ғалимдары раҫлауынса, баҡса еләге экстракты ҡояш нурланышынан һәм ҡояшта бешеүҙән һаҡлай. Был яһалма юл менән үҫтерелгән тирелә тикшерелеп ҡаралған, алдан тирене ультрафиолет нурҙарында нурландырғандар. Баҡса еләге экстракты менән эшкәртелгән тирелә күҙәнәктең һаҡланыу көстәре әүҙемләшкән, асыҡланыуынса, ул яман шеш йәки ялҡынһыныуға килтереүсе процестарҙан да һаҡлаған. Ғалимдар фекеренсә, баҡса еләгенең дауалау көсө антоциан тип йөрөтөлгән ҡыҙыл пигменттарҙа икән - тап улар ялҡынһыныуға ҡаршы һәм антиоксидант һөҙөмтәгә эйә.

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА...

**2013 йылдың февралендә РФ Дәүләт Думаһы тарафынан ҡабул ителгән һәм 1 июндән көсөнә ингән - йәмәғәт урындарында тәмәке тартыуҙы тыйған закон тураһында күпселек ишеткәндер, моғайын. Байтаҡ шау-шыу тыуҙырған был закон һәм тәмәке тартыу, тәмәкене ташлау тураһында мин дә, элекке тәмәкесе булараҡ, фекерҙәремде яҙып китергә теләнем.**

# ТӘМӘКЕ - ИҢ ОЛУҒ ЕНӘЙӘТСЕ,
## ул донъяла иң күп кеше үлтереүсе



### Берәү менән әңгәмә

- Тәмәкегә ҡаршы законмы, әллә тәмәкеселәргәме?

- Тәмәкегә ҡаршы закон. Тәмәке тартмағандарҙың сәләмәт тормошҡа хоҡуғын яҡлаусы закон. Тартыусылар башҡалар хаҡында уйламай, улар тик үҙҙәренең никотинға булған "һыуһау"ын баҫырға ынтыла. Литвала ла шундай закон ҡабул иткәндәр, тәмәкеселәр аҙаҡтан депутаттарға рәхмәт әйткән икән.

- Кемгә яҡшы, кемгә насар?

- Әлбиттә, тартмағандар өсөн яҡшы, тартыусылар өсөн насар, тип әйтер ағыу йотоусылар. Ысынында иһә, әгәр ҙә ҡайҙалыр көйрәтергә рөхсәт ителмәй икән, тәмәкеселәр быға үҙҙәре лә шат. Тимәк, барыһы өсөн дә һәйбәт була.

- Был закон миңә (бер кемгә лә) тәмәкене ташларға ярҙам итмәйәсәк!

- Моғайын, шулайҙыр. Әммә тулы көсөнә эшләһә, ул балаларға һәм үҫмерҙәргә был әшәкене ауыҙға алыуҙы ҡыйынлаштыра ала.

- Ҡайҙа тартырға ярамаясаҡ?

- Дәүләт учреждениеларында, юғары уҡыу йорттарында, мәктәптәрҙә, стадиондарҙа, поездарҙа, вокзалдарҙа. Ҡайһы бер урындарҙа тәмәке менән ағыуланыу 2014 йылдың 1 июненән генә тыйыласаҡ.

- Киосктарҙа, бәләкәй магазиндарҙа тәмәке һатыу тыйыла, бөлгөнлөккә төшәсәктәр, сөнки улар һыра һәм тәмәкелә генә аҡса эшләйҙәр бит!

- Ә героин һатыусы йәки синтетик наркотик уйлап табыусылар йәл түгелме һеҙгә? Улар ҙа шуның менән "мал таба" лаһа! Банкрот булһындар әйҙә - ул киоскыларҙан ни файҙа? Бер эшҡыуар банкрот булмаһын өсөн һеҙ үҙ балағыҙҙың һаулығын ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыр инегеҙме? 18 йәшкә етмәгәндәргә берене лә тәмәке, һыра һатмағанға күрә үҫмерҙәр араһында эскеселәр, тәмәкеселәр һаны артамы икән?

### Кем нисек уйлай?

**Ғәбит Монасипов, хәбәрсе:** 15 йылдан ашыу тәмәке тарттым. Аллен Карр яҙған "Тартырға ташлауҙың еңел ысулы" китабы буйынса эш иттем. Был бәйлелектән ҡотолорға теләүсе бөтә кешеләргә шул китапты тәҡдим итер инем, ул ысынлап та ярҙам итә. Иң тәүҙә тартыусы үҙенең ауырыуын танырға һәм һауығырға теләргә тейеш. Сирен йәшергән - үлгән, тигән халыҡ. Закон тартырға ташларға ярҙам итмәһә лә, ыңғай яҡтары бихисап уның. Иң мөһиме - законды тормошҡа ашырыуҙа сәйәси ихтыяр булһын ине.

**Михаил Семенов, слесарь:** Был закондың бер ыңғай яғын да күрмәйем. Нисек тартһалар, шулай тартасаҡтар. Полиция хеҙмәткәрҙәре үҙҙәре лә быҫҡыта. Ә яңғын һүндереүселәр үҙҙәренең биналарында тарта, башҡаларға штраф һала.

### Изге маҡсаттарға ирешелә күрһен!

● Тәмәке компанияларына лотореялар үткәрергә, фестивалдәрҙә бағыусы булырға тыйыласаҡ (юғиһә, шаҡ ҡатырлыҡ бит: спорт ярышының бағыусыһы - кешеләр һаулығын ҡаҡшатыуҙа аҡса һуғыусы корпорациялар!)

● Тәмәке витриналарҙан алынасаҡ (ағыу етештереүселәр үҙҙәренең "тауар"ын ялтырап торған ҡаптарға һалып һата, ә эсендә - үлем! Матур ҡаптар балаларҙың күҙен ҡыҙыҡтырып тормаһын).

### Ҡот осҡос күренештәр юғалһын ине

● Балалар майҙансығында (мәктәп биләмәһендә, йәки башҡа ерҙә) сабыйҙар уйнай, ә яндарында йәш әсәләр һаҫыҡ төтөндәрен бөркөтә (һәм һыра эсә). Кемелер йәшенеберәк, кемдер асыҡтан-асыҡ. Үҙҙәрен ситтән матур күренә тип уйлайҙармы икән? (Бер урыҫ яҙыусыһының романында офиста эшләүсе ҡыҙ хаҡында "ул бик тиҙ итеп ике ҡул менән машинкала текст йыя, шул арала тәмәке тартып ултыра ла өлгөрә һәм ул бик матур күренә ине" тигәнерәк һүҙҙәрҙе уҡып үткәйнем. Ул романдың сюжетын бик томанлы ғына хәтерләйем, ә бына теге цитата һаман хәтерҙә! Был ни хаҡында һөйләй? Аҫҡы аңға шулай итеп "матурлыҡ идеалы" һалыныуы мөмкин!) Ошо тәмәке тартыусы ҡатындар балаларының да шулай үҙ-үҙен ағыулауын теләйме икән?

● Йәш атай коляска этеп китеп бара, ә ауыҙында тәмәке. Тәмәкеһен ситтәрәк тотҡан була, йәнәһе, төтөн (ағыу) балаға барып етмәй. Әлбиттә, ул үҙ-үҙен алдай - сабыйы уның әшәкеһен "туйғансы" һулап бара.

● Олатай бер ҡулы менән ейәнсәрен етәкләп балалар баҡсаһына алып китеп бара. Икенсе ҡулында - яман шеш таяҡсаһы. Ул да үҙен насарлыҡ ҡылам тип уйламай. Ә ейәнсәренең аҫҡы аңына образ һалына - тәмәке тартыусы яҡшы, изгелекле олатай.

### Тоҙаҡ

Бер совет фильмында (исемен хәтерләмәйем, аҡлы-ҡаралы фильм ине шикелле) бер ағайҙың йәш ҡыҙға: "Ҡатын-ҡыҙҙың тәмәке тартыуы насар, ә бына ир-егет тартырға тейеш",- тигән һүҙҙәре хәтергә һеңеп ҡалған. Шулай беҙҙе бәләкәстән тәмәкесе итәләр - уны китаптар, йырҙар, кино, йәнһүрәт аша һәм туранан-тура рекламалайҙар. Мин үҙем, моғайын, "Camel" ("Дөйә" тип тәржемә ителә) тәмәкеһенең рекламаһы арҡаһында тарта башлағанмындар, тип уйлайым. Ул саҡта телевидение аша тәмәке рекламаһы тыйылмағайны әле. Уның сюжеты буйынса бер көслө ир кеше кәмәлә йөҙә, йылғаның ағымы менән көрәшә, төрлө ҡаршылыҡтар аша үтә... һәм еңеп сыға. Аҙаҡтан, төтөн, усаҡ янында "ләззәтләнеп" тәмәке көйрәтеп ултыра, "героик" музыка яңғырай. Тимәк, рекламаның аҫҡы аңға һала торған фекере шундай: "Беҙҙең тәмәкене тартыусылар шундай көслө булалар", "Тәмәке ҡаршылыҡтарҙы еңергә ярҙам итә"... Минең дә шул ир кеүек көслө, бойондороҡһоҙ булғым килде. Бер тапҡыр ҙа кәмәлә тау йылғаһында йөҙөргә лә, бер үҙемә кеше аяғы баҫмаған ерҙәргә төнөн усаҡ яғып ултырырға ла тура килмәне, ул ир һымаҡ мускулатура ла үҫтермәнем, әммә тәмәке ҡоллоғона баттым. Бына нисек эшләй ул тоҙаҡ!

### Ҡотолоу юлы

Һәр тәмәкесенең үлемесле һуҡмаҡтан барыуҙан туҡтарға мөмкинлеге бар. Тәмәке тартыуҙы ташларға теләүсе бар кеше лә Аллен Карҙың китабын уҡып сыҡһын ине, зыяны булмаҫ, ә файҙаһы - ҡоллоҡтан ҡотола алаһығыҙ! Әгәр ҙә һеҙ "Миңә тәмәке тартыу оҡшай, ташлағым килмәй", тиһегеҙ икән, үҙегеҙҙе алдайһығыҙ. Шундай һорауҙарға яуап биреп ҡарағыҙ: балаларығыҙҙың тәмәке тартыуын хуплар инегеҙме? Һаҫыҡ төтөн һулап, башҡаларҙы ла ағыулап, үҙеңде үлтереүгә үҙең һанһыҙ аҡса түгеп, үҙеңә нәфрәт тойоп йәшәү урыһына бәхетле тормошҡа аяҡ баҫыу яҡшыраҡ түгелме?

### Иҫкәртеү

Тәмәке һәр 6 секунд һайын бер кеше ғүмерен өҙә. Йыл һайын донъяла 5 миллион, Рәсәйҙә 1 миллион кеше тәмәке тартыу арҡаһында яҡты донъя менән хушлаша. Рәсәйҙәге ирҙәрҙең ваҡытынан алда вафат булыуы ике сәбәп арҡаһында килеп сыға - тәмәке тартыу һәм эскелек. Беҙҙең илдә һәр икенсе ир беренсе пенсияһын да ала алмай вафат була.

**Морат СОЛТАНОВ.**
**Октябрьский ҡалаһы.**

*БӘЙҒӘМБӘР КӘҢӘШТӘРЕ*

# "ҺӘР НӘМӘНЕҢ ҮҘ ВАҠЫТЫ..."



**Аллаһ Илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләренең береһе Әбү Рабий Хәнзәллә бин Раби әл-Усайдий былай тип һөйләгән:**

"Бер ваҡыт мин Әбү Бәкерҙе осраттым. Ул минән:

- Нисек йәшәйһең, Хәнзәллә?- тип һораны.

- Хәнзәллә ике йөҙлө кешегә әйләнде,- тинем мин.

- Сөбхан Аллаһ! Нимә һөйләйһең һин?

- Мин Аллаһ Илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) янында уның Ожмах һәм Тамуҡ тураһында һөйләгәндәрен ишетһәм, уларҙы үҙем күргәндәй булам. Әммә ҡатыным, балаларым, донъяуи эштәремә ҡайтыуым була, мин күбеһен онотам.

- Беҙҙең икебеҙҙе лә бер үк мәсьәлә борсой!- тине Әбү Бәкер. Шунан беҙ Аллаһ Илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) янына бергәләп киттек. Килеп еткәс мин:

- О, Аллаһ Илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Хәнзәллә ике йөҙлө кешегә әйләнде!- тинем.

Аллаһ Илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм):

- Был һүҙҙәрең нимә аңлата?- тип һораны.

- Беҙ һинең янында булғанда Ожмах һәм Тамуҡ тураһында һөйләгәндәреңде тыңлап, уларҙы үҙ күҙҙәребеҙ менән күргәндәй булабыҙ. Тик ҡатындарыбыҙ, балаларыбыҙ, донъя эштәребеҙгә ҡайтыуыбыҙ була, беҙ күбеһен онотабыҙ!

Мөхәммәт бәйғәмбәр (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тине:

- Аллаһы Тәғәлә менән ант итәм, әгәр ҙә һеҙ минең янымда булғандағы кеүек Аллаһты иҫегеҙҙән сығармай йөрөһәгеҙ, фәрештәләр түшәктә лә, юлда ла ҡулығыҙҙан етәкләп йөрөтөр ине. Хәнзәллә, һәр нәмәнең үҙ ваҡыты! - ул был һүҙҙәрҙе өс тапҡыр ҡабатланы. (Мөслим, Тәүбә, 12-13; Тирмизи, Ҡиәмәт, 59)."

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләре тормоштарын тик дин талаптары буйынса ғына ҡорорға теләй. Барлыҡ эштәре, һүҙҙәре менән улар Бәйғәмбәр ҡушҡанды ихлас үтәй. Сәхәбәләр Бәйғәмбәргә ҡарата булған һөйөүҙәре үҙгәрер, йөрәктәренә ике йөҙлөлөк инеп оялар, тип ҡурҡа. Кафыр, монафиҡ булып китеүҙән үҙҙәрен һаҡларға тырыша. Әлбиттә, диндар Әбү Бәкер һәм Хәнзәллә ике йөҙлөлөктән күпкә алыҫ булған. Улар һөйләгән ике йөҙлөлөк Бәйғәмбәр яндарында булмаған осраҡта килеп тыуған ысынбарлыҡты тойоу хисенең үҙгәреүе була, әммә дингә ышанысты юғалтыу түгел. Әбү Бәкер (разийаллаху ғәнһүм) Хәнзәлләгә был ауыр һорауға яуап табырға ярҙамлаша. Ул Хәнзәлләгә ауыр уйҙарға батып, ҡайғырып ултырыу урынына Аллаһ Илсеһенең (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенә мөрәжәғәт итергә тәҡдим итә. Мәсьәләне былай сисеүгә ынтылыу түбәндәге аят менән тап килә: "Әгәр ҙә сетерекле хәл килеп тыуа икән, Аллаһы Тәғәлә һәм Ҡиәмәт көнөнә ышанһағыҙ, уның сиселешен тик Аллаһы Тәғәлә һәм уның Илсеһе ҡулына тапшырығыҙ" ("Ән-Нисә" сүрәһе).

Мөхәммәт бәйғәмбәр (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Әбү Бәкер һәм Хәнзәлләгә ҡылыҡтары ике йөҙлөлөк булмауын аңлатып, Аллаһы Тәғәләгә хеҙмәт иткәндә лә алтын урталыҡ хаҡында онотторға ярамағанлыҡ хаҡында иҫкәртә. Бәйғәмбәр тулыһынса донъя эштәренә бирелеп китеүҙе лә, уларҙан баш тартып, дәрүиш булып йөрөүҙе лә, ярамаған эш, тип аңлата. Ислам дине беҙҙең тормошобоҙҙо яйлай. Шуның өсөн кешеләргә аҡыл эйәләре менән дә, дин әһелдәре менән дә берҙәй осрашып торорға ҡушыла. Улар менән һөйләшкәндә кеше күп кенә кәрәкле мәғлүмәттәр туплай, яңғыҙлыҡтан ҡотола.

Ислам дине файҙа килтерерҙәй һәр төрлө эште хуплай. Әммә кеше нимә генә эшләһә лә, үҙе Аллаһы Тәғәләне иҫенән сығармаҫҡа, ә эше ғибәҙәт ҡылыуға ҡаршылыҡ тыуҙырмаҫҡа тейеш. Аллаһ Илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Һәр нәмәнең үҙ ваҡыты!"- тип әйткән. Был һүҙҙәр көндәлек тормош мәшәҡәттәренә лә, ғибәҙәт ҡылыу өсөн дә билдәле ваҡыт сарыф итергә кәрәк булыуы хаҡында һөйләй.

Кеше фәрештә йәки шайтан булырға ынтылырға тейеш түгел. Ул яман эш ҡылыуҙан ситләшергә, тик яҡшылыҡҡа ғына инанырға һәм һәр ваҡыт кеше булып ҡалырға тейеш.

*ХӘҘИСТӘРҘӘН*

# ЫСЫҠ ТАМСЫҺЫНА...

## диңгеҙ йәшерелгән

**XIII быуатта йәшәгән донъялағы иң күренекле шағирҙарҙың береһе суфый Жәләлетдин Руми үҙ ижадында, шул иҫәптән билдәле "Мәснәүи" әҫәрендә кеше асылына ҙур иғтибар бүлә. Руми күҙлегенән кеше - Хоҙай тыуҙырған иң камил зат. "Кеше Арштан да (йыһандағы иң ҙур һәм мөһабәт есем) бөйөгөрәк. Был бөйөклөктө аҙағынаса аңлап, күҙ алдына килтереп тә булмай", ти Руми. Шулай итеп, шағир әйтеүенсә, Аллаһы Тәғәлә ерҙә лә, күктә лә кешенән дә серлерәк затты тыуҙырмаған.**

Шул уҡ ваҡытта Руми әҙәм балаһы ҡылыҡтарын тәнҡитләп: "Был донъяла һин ләззәттәр эҙләйһең. Мәғәнәһеҙ уй-ҡылыҡ был. Һин бит - ысыҡ тамсыһында йәшерелгән ҡөҙрәт диңгеҙе, һин - метр ярым тәнгә һыйған йыһан", - тип яҙа. Шағир фекеренсә, кешенең йәне лә, тәне лә бер үк дәрәжәлә ҡәҙерле. Тән - йәндең ҡабығы, уның кейеме. Шуға ла ул йән кеүек үк һаҡланыуға мохтаж. Әҙәм балаһына тотош донъя ингән. Тышҡы формаһы менән кеше - микрокосм, ә ысынында - макрокосм, ти Руми. Кеше үҙендә ошондай һәләтлектәрҙе асһын өсөн уға түбән теләктәрҙән, тәкәбберлектән азат булырға кәрәк. Ул "йөрәк эсендәгеһен иләк аша үткәрергә" тейеш, сөнки "кеше күңелен ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан ҡорғандар". Шуға "ҡайһы саҡта хатта фәрештәләр кешенең сафлығына хайран ҡала, ә ҡайһы саҡта шайтандар ҙа уның гонаһтарынан ҡурҡа". Тимәк, кешене уның кәмселектәренән сығып түгел, ә ниәтенән, тырышлығынан, рухи мөмкинлегенән сығып баһаларға кәрәк.

Кешенән яҡшылыҡ ҡына көтөргә ярамай. Диңгеҙҙә лә бит ынйылар ҡом менән буталған, мәғдән алтынды ла ябай таш тоҡомонан айырмаҫһың. Шуға күрә, маҡтауға лайыҡ булған нәмә йыш ҡына етешһеҙлектәр араһында була. Кеше, ғәҙәттә, барыһын да тура мәғәнәлә ҡабул итә. Һиненсә ҡабул ителгән күренеш, ҡылыҡ, хәл-ваҡиға ысынбарлыҡта бөтөнләй икенсе төрлө булып сығыуы ихтимал. Был хаҡта Руми шулай яҙа: "Һәр кем, аҡыл эйәһе йәки наҙан булһынмы, изгелекте нәфрәттән айыра ала. Ләкин нәфрәт эсенә йәшерелгән изгелекте, йәки изгелек эсендәге нәфрәтте йөрәгендә рухи үҙәк булған кеше генә күрәсәк".

Кеше үҙ-үҙен баһалап етмәй, ти Руми: "Әҙәм балаһы, һин үҙ йәнеңдең ҡәҙерен белмәйһең, сөнки Аллаһ йомартлығы менән уны һиңә бушлай биргән". Кеше мәңгелектән килеп, фани донъяға йөрәге менән бәйләнеп ҡуя, үҙ-үҙен арзанға һата: "Ҡиммәтле ебәк туҡыма булып та, кеше иҫкергән кейемдәге ямауға әүерелә". Руми әйтеүенсә, кешегә һәр ваҡыт үҙ-үҙен бөйөк ҡәҙер тип белергә һәм ғүмерен ошоға ярашлы ҡорорға кәрәк. Ул йөрәге шар асыҡ торған кеше булырға тейеш, сөнки Аллаһҡа илткән юл уның күңелендә башлана.

**Хәсән ЙЫЛМАЗ, профессор.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Бишенсе көн.

**Беренсе бүлек. Аҡыл. Иғтибар туплау оҫталығын камиллаштырыу**

Тормошта уңыш ҡаҙаныу өсөн, нисек кенә сәйер булмаһын, ябай ғына нәмә - аҡылды туплай белеү һәләте асҡыс булып тора. Аҡылығыҙҙы туплау һәләтенә эйә булып, һеҙ үткәндә лә, киләсәктә лә түгел, ә тап бөгөнгө менән йәшәрһегеҙ. Иғтибарығыҙҙы һөҙөмтәле итеп тупларға өйрәнеү менән ҙур проблемалар бәләкәйләнер, һәм һеҙ күренештәрҙе бөтөнләй икенсе күҙлектән баһалай, үткән уңышһыҙлыҡтарығыҙҙан һәм ғәмәлдәрегеҙҙең эҙемтәләренән арынып, тағы ла һөҙөмтәлерәк эшләй башларһығыҙ. Эштәрегеҙ еңел башҡарылыр, алда торған маҡсаттарығыҙға өлгәшеү һәм бурыстарығыҙҙы хәл итеү өсөн алға етеҙерәк барырһығыҙ. Иғтибар туплау аҡылды тынысландыра. Аң ни тиклем көслө, рауза ҡыуағына оҡшаш тормош тағы ла матурыраҡ сәскә атасаҡ. Әммә сәскәләр араһында сәнскеләр ҙә бар икәнлеген онотмағыҙ. Әммә уларҙан өҫкәрәк күтәрелһәгеҙ, һеҙгә иҫ киткес матурлыҡ бүләк булыр. Һәр ваҡыт рауза сәскәһен һәм уның һоҡланғыс өҫтөнлөктәрен хәтерегеҙҙә тотоғоҙ. Бөгөнгө күнекмә күңелегеҙгә хуш киләсәк.

Бер рауза сәскәһе һатып алығыҙ. Уны тыныс урынға урынлаштырығыҙ һәм күҙегеҙҙе алмайынса, мөмкин булған тиклем оҙаҡ итеп ҡарағыҙ. Уның һоҡланғыс сифаттарына, таж япраҡтарының текстураһына һәм гүзәллегенә иғтибар туплағыҙ. Уйҙарығыҙҙы һәм ҡарашығыҙҙы раузанан айырмағыҙ. Әгәр аңығыҙҙы тупларға өйрәнмәһәгеҙ, уға сит уйҙар инәсәк. Был йәһәттән артыҡ борсолмағыҙ, был уйҙарға күк йөҙөндә болоттар йөҙөп үткән кеүек һеҙҙең аша үтергә мөмкинлек бирегеҙ һәм ҡабат рауза тураһындағы уйҙарығыҙға әйләнеп ҡайтығыҙ. Был иғтибар туплау күнекмәһен көн һайын эшләгеҙ. Һис бер нәмәгә иғтибар йүнәлтмәйенсә нимәгәлер 20 минут буйы иғтибар туплап ҡарап тора алаһығыҙ икән, аңығыҙ һеҙҙең өсөн ниндәйҙер ғәҙәти булмаған нәмә эшләү һәләтенә эйә булды, тигән һүҙ. Бындай күнекмә тормошоғоҙға индергән үҙгәрештәрҙе күреп аптырап ҡалырһығыҙ.

**Икенсе бүлек: Тән. Тауышты күнектереү - йәшәү көсөн нығытыу буйынса боронғо методика.**

Боронғо Тибет халҡы тәндең сәләмәтлеге организмдың ете өйөрмәле ағымы (уларҙы икенсе төрлө чакралар тиҙәр) эшмәкәрлеге менән идара ителә, тип ышанған. Улар үҙҙәренең өйөрөлөүенән туҡтай икән, гормональ үҙгәрештәр ҡартайыу механизмын эшкә ҡуша. Шундай өйөрмәле ағымдарҙың береһе, муйында урынлашҡаны, тауыш ярылары менән идара итә. Әгәр тауышты көсәйтәбеҙ икән, был ағым сәләмәтлекте нығытыуҙы дәртләндерәсәк. Тап шуға күрә Тибет монахтары көн һайын йырлай. Бындай вокал күнекмәләр иғтибар туплауҙың бик мөһим сифаттарын ғына яҡшыртып ҡалмай, камил сәләмәтлек тәьмин итә.

**Күнегеү**

Ябай ғына "м-м-м" өнөн көн дауамында биш минут ҡабатлағыҙ. Бының өсөн иң яҡшы ваҡыт - душ ингәндә. Яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн тауышығыҙҙы күнегеүҙе ҡабатлай алмаҫлыҡ дәрәжәгә еткәнсе түбәнәйтегеҙ.

**Робин ШАРМА.**



## 12 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "Последний герой" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.20 "Трое в Коми". Сериал (16+)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Однолюбы". Сериал (16+)
23.30 "Следствие по телу". Сериал (16+)
00.20 "Снова ты" (12+)
02.20, 03.05 "Брубейкер" (12+)
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00, 14.00, 17, 20.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
